*Аллаһтың ихлас колдарына кыуаныс –*

# НАМАҘ КИТАБЫ

*1-се баҫма*

**«Йәннәткә баҫҡыс»**
нәшриәте

**Өфө – 2013**

بِسْمِ اللّٰهِ الرَّحْمٰنِ الرَّحِيمِ

**Бисми-Лләһи-ррахмәни-ррахим!**

*Мәрхәмәтле һәм Рәхимле Аллаһ исеме менән!*



**Аллаһтың ихлас ҡолдарына ҡыуаныс – намаҙ китабы.** – Өфө: Йәннәткә баҫҡыс, 2013. – 48 бит.

Был китап асылда барлыҡ мосолмандарға тәғәйенләнгән: намаҙ уҡымағандар – намаҙҙың һәр кемгә мотлаҡ икәнен аңлаһын, намаҙ уҡый башларға теләүселәр, – ниһайәт, өйрәнһен һәм башлаһын, ә намаҙ уҡыусылар иһә үҙ намаҙҙарының дөрөҫлөгөн тикшерһен өсөн. Китап бары тик ышаныслы сығанаҡтарға таянып яҙылған. Һәр кем был баҫманан үҙенә тейешле рәүештә файҙа алһа ине, тип теләп ҡалабыҙ. Китаптың нигеҙендә билдәле дәғүәтсе Әбү Ғәҙелдең (Абу Адель) «Ислам намаҙһыҙ булмай. Иң ҡыҫҡа намаҙ» тигән брошюраһы ята. Теләктәрегеҙҙе һәм тәҡдимдәрегеҙҙе авторға abu-adel@mail.ru электрон адресы буйынса яҙып ебәрә алаһығыҙ.

© Илнур Әбү Ғәҙел, 2012
© «Ваҡыт!» гәзите, 2012
© «Йәннәткә баҫҡыс», 2013

# ИНЕШ ҺҮҘ

Әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуЛлаһи үә бәрәкәтүһү!

Барығыҙға ла сәләм, Аллаһтың рәхмәте һәм бәрәкәте! Фәҡәт Уның ихтыяры менән беҙ һаман да тере һәм фәҡәт Уның рөхсәте менән ошо гүзәл китап донъя күрҙе. Аллаһ рөхсәте булмаһа, бер япраҡ та өҙөлөп төшмәй, бер тамсы һыу ҙа күктән яумай, бер секундлыҡ ел дә иҫмәй. Әгәр Аллаһ теләмәһә, бөтә донъя кафырҙары бергә йыйылып, беҙгә ҡаршы хәйләмәкер ҡорһа ла, уларҙың беҙгә бер ниндәй зыяны булмаясаҡ. Аллаһ – мөьминдәрҙең Яҡлаусыһы! Һәм Яҡлаусы, Һаҡлаусы булараҡ беҙгә Аллаһ етә!

«Күптәр, бәлки, дингә килер ине лә, уларҙы тик намаҙ уҡый белмәүҙәре генә тотҡарлай», - тигән ине бер ҡәрҙәшебеҙ. Был һүҙҙәр, ысынлап та, хаҡиҡәткә оҡшаш. Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең нисек дингә килгәнде иҫләһәк, тик намаҙға баҫҡас ҡына бит беҙ диндең ысынында нимә икәнен ныҡлап аңлай башланыҡ. Шуға күрә башҡортса дини әҙәбиәт нәшер итеү буйынса оло һәм матур эшебеҙҙе намаҙ уҡырға саҡырыуға һәм намаҙ тәртибенә өйрәтеүгә бағышланған ошо китаптан башларға ҡарар иттек тә. Дин буйынса йәшәй башларға теләүселәр, намаҙға баҫа алмай икеләнеп йөрөүселәр был китапты уҡып сығып, ныҡлы бер ҡарарға килһен өсөн.

Йәғни, әле һеҙҙең ҡулда – «Йәннәткә баҫҡыс» тигән яңы нәшриәттең тәүге татлы емеше! Уны беҙ «Аллаһтың ихлас ҡолдарына ҡыуаныс – намаҙ китабы» тип атаныҡ. Ни өсөн? Сөнки күңелендә Аллаһҡа ҡарата саҡ ҡына булһа ла ихласлыҡ һаҡлаған кешеләр был китапҡа, иншә Аллаһ, бик ныҡ ҡыуанасаҡ. Тура юлға баҫыуҙан, тормош мәғәнәһен табыуҙан да ҡыуаныслыраҡ тағы нимә булһын?! Ошо ниғмәттең ҡәҙерен белһәк ине ул!

Был китаптың нигеҙендә Әбү Ғәҙелдең «Ислам намаҙһыҙ булмай. Иң ҡыҫҡа намаҙ» тигән брошюраһы ята. Был китапсыҡ башҡорт, рус һәм татар телдәрендә бер нисә тапҡыр меңәрләгән тираждар менән донъя күрҙе лә инде. Илнур Әбү Ғәҙел *(Абу Адель)* үҙе – йәш, әммә Рәсәйҙә билдәле дәғүәтсе, төрлө брошюраларҙан тыш, ул «Ғәрәп теле курсы», «Ҡөрьән тәфсире» кеүек етди хеҙмәттәр авторы ла. Сығышы менән үҙе

Татарстандан (әле ғаиләһе менән Мысырҙа йәшәй).

Нигеҙҙә уның китабы ятһа ла, ҡайһы бер урындарҙа беҙҙең тарафтан өҫтәмәләр һәм үҙгәрештәр индерелде. Мәҫәлән, «Тәһәрәт, ғөсөл», «Намаҙ ҡағиҙәләре», «Намаҙ уҡыу тәртибе» тигән бүлектәр тулыһынса яңынан яҙылған, «Намаҙ уҡырға ваҡыт!», «Уҡыуҙа, эштә, юлда», «Кемдә ниндәй сәбәп?» тигән бүлектәрҙә өҫтәмәләр кертелгән. Әҙәбиәт булараҡ, шулай уҡ, шәйх Мөхәммәт Насырутдин Әл-Албаниҙың «Пәйғәмбәр ﷺ намаҙы», Асым Уйсалдың «Ғөсөл, тәһәрәт һәм намаҙға өйрәнәм», Рәшиҙә Исхаҡиҙың «Намаҙ уҡыу тәртибе» кеүек популяр китаптары һәм башҡа ҡайһы бер материалдар ҡулланылыш тапты. Ул авторҙарҙың барыһынан да Аллаһ Тәғәлә риза булһын!

Әлбиттә, намаҙға ҡағылышлы бөтә ҡағиҙәләрҙе, хәҙистәрҙе һәм саҡырыу һүҙҙәрен был кескәй бер китапсыҡ эсенә генә һыйҙырып булмай. Кем үҙенең намаҙын артабан камиллаштырырға теләй, улар фиҡһ, намаҙ буйынса ғалимдар яҙған махсус хеҙмәттәргә мөрәжәғәт итә ала. Был китап иһә, алдан әйтеп үткәнебеҙсә, намаҙға саҡырыу, намаҙға башлап өйрәтеү, намаҙ уҡып та, уның ҡағиҙәләрен тейешле рәүештә белмәгәндәргә намаҙҙарын яҡшыртыу өсөн эшләнде. Иншә Аллаһ, меңләп-меңләп кешеләргә файҙаһы тейһен ине уның!

Намаҙ – ул Исламдың терәге, Ислам намаҙһыҙ булмай. Намаҙ – мосолманды кафырҙан айырып тороусы иман билдәһе. Намаҙ – ул Аллаһҡа шөкөр итеү, Уға үҙеңдең ихласлығыңды, буйһоноуыңды белдереү. Намаҙ уҡыу кешене насар эштәрҙән туҡтата һәм намаҙ уҡыу гонаһтарҙы юя. Намаҙ уҡыр өсөн күп ваҡыт кәрәкмәй, әммә намаҙ уҡыр өсөн ихласлыҡ кәрәк. Теге донъяла беҙҙән иң тәүҙә намаҙҙарыбыҙ өсөн һораласаҡ. Намаҙ уҡыу йән тыныслығы бирә, кешенең рухын күтәрә. Аллаһҡа буйһонған кеше бүтән кешеләргә табынмай, уларҙан ҡурҡмай һәм уларға ярамһаҡланмай. Намаҙ уҡыусы – ул Аллаһтың ғына ҡоло, әммә был донъя өсөн ул – иң иркле кеше! Эй, кешеләр, барығыҙға ла намаҙ уҡый башларға ваҡыт!

*Ихтирам менән, нәшер итеүселәр.*
*Өфө, 2013 йыл.*

ﷺ – был яҙыу «салла-Ллаһу ғәләйһи үә сәлләм» тип уҡыла. Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙҙең исемен уҡығанда йә ишеткәндә уға шулай салауат әйтергә кәрәк. Яҡынса тәржемәһе: «Уға Аллаһтың ризалығы һәм сәләме булһын!»

# НАМАҘ – АЛЛАҺ ӘМЕРЕ

## Был тормошта иң мөһиме – Аллаһҡа ғибәҙәт

Аллаһ Тәғәлә был донъяны барлыҡҡа килтереп, унда кешене яратты. Кем берәй әйбер яһай – шул уның маҡсатын да билдәләй. Аллаһ Тәғәлә Үҙенең китабы Ҡөрьәндә кешеләргә былай тигән: **«Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе фәҡәт Миңә ҒИБӘҘӘТ ҡылһындар өсөн генә бар иттем»**[1].

Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу – Аллаһ риза булырлыҡ һәм Аллаһ ярата торған яҡшы, изге эштәр башҡарыу ул. Ғибәҙәткә миҫалдар: Аллаһтың рәхмәтенә өмөт итеү, Уның ғазап ебәреүенән ҡурҡыу, Аллаһты данлау һәм маҡтау, Уның биргән барлыҡ ниғмәттәре өсөн шөкөр итеү, Унан доға ҡылып нимәлер һорау, намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, зәкәт түләү, саҙаҡа биреү, Мәккәгә хаж ҡылыу һәм башҡа шундай ғәмәлдәр.

Эйе, кеше ашай, йоҡлай, уйнай, эшләй, уҡый, ял итә – Аллаһ Тәғәлә беҙҙе шулай яратҡан. Әммә иң мөһиме: кеше бер Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылыр өсөн яратылған. Шулай ҙа Аллаһ кешегә бөтөн булған ваҡытын намаҙ-зикерҙәрҙә генә уҙғарырға ҡушмаған. Шул уҡ намаҙ уҡыу өсөн, мәҫәлән, тәүлегенә бер нисә минут ваҡыт етә. Ә инде көнө-төнө тәсбих әйтеп, сәждәләр ҡылыусы – фәрештәләр генә. Уларҙың бар эше шул.

Кем Аллаһҡа ғына табына – ул хәниф (*русса* – единобожник). Аллаһҡа табынып та, Уның менән бер рәттән бүтән берәүҙе илаһилаштырыусы – ул мөшрик (*русса* – многобожник). Кем Аллаһты танымай – ул дәһри, атеист (*русса* – безбожник).

Әгәр ҙә берәй әйбер ҡулланылмайынса тик ятһа, уны беҙ файҙаһыҙ тибеҙ. Шуның шикелле, әгәр кеше лә Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылмаһа, уның тормошо мәғәнәһеҙ, файҙаһыҙ була.

Кемдер: «Мин Аллаһҡа табынмаһам да, кешеләргә изгелек эшләйем бит», - тип әйтер. Һүҙ юҡ, кешеләргә изгелек эшләү һәйбәт. Әммә Аллаһ Тәғәләнең ризалығын алыу хәйерлерәк, сөнки Аллаһ быға күпкә-күпкә нығыраҡ хаҡлы! Аллаһҡа буйһоноп, ғибәҙәт ҡылыу – Уға шөкөр итеүҙең билдәһе ул. Кеше-

[1] Ҡөрьән, «Елгәреүселәр» сүрәһе, 51:56.

ләр араһында хөрмәткә, ихтирамға иң лайыҡлы заттарҙан – әсәй һәм атай. Донъяға килеүенә сәбәпсе булған, тәрбиәләп үҫтергән ата-әсәһенә ҡарата кеше һәр ваҡытта ла рәхмәтле булып, уларға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп йәшәргә тейеш. Шулай булғас, кеше уның үҙен дә, уның ата-әсәһен дә юҡтан бар иткән, уларға ризыҡ-ниғмәт биреп торған Аллаһҡа ҡарата күберәк шөкөр итеп, буйһоноп йәшәргә бурыслы түгелме һуң?..

## Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу – кешенең төп бурысы

Бер Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылыу – кешенең төп бурысы. Аллаһ Ҡөрьәндә кешеләргә: **«Эй, кешеләр! Һеҙҙе барлыҡҡа килтергән һәм һеҙҙән элек булғандарҙы барлыҡҡа килтергән Раббығыҙға ҒИБӘҘӘТ ҡылығыҙ – моғайын һеҙ тәҡүәлеләрҙән булырһығыҙ!»**[2] - тип әмер иткән.

Аҡыллы кеше бала сағынан уҡ үҙенең ата-әсәһенә ҡарата бурыстарын таный. Шулай уҡ, кешенең үҙ-үҙенә ҡарата ла бурыстары байтаҡ: ашап-эсеү, йыуыныу, кейенеү һәм башҡаһы. Әммә һәр кешенең төп бурысы – Аллаһ Тәғәләнең әмерҙәрен үтәү. Ә Аллаһ Тәғәлә Үҙенә ышанған һәм буйһонған кешеләргә Йәннәт вәғәҙә иткән: **«Аллаһтың сиктәре ошо. Кем Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһона, Аллаһ уны аҫтында йылғалар ағып торған баҡсаларға индерер, ул унда мәңгегә ҡалыр, һәм был – бөйөк уңыш!»**[3]

Үҙенә буйһонмағандарҙы иһә Аллаһ ғазап менән ҡурҡытҡан: **«Кем Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһонмай һәм Уның ҡуйған сиктәрен уҙа, Аллаһ уны Тамуҡҡа индерер, ул унда мәңгегә ҡалыр, һәм уға – хурлыҡлы ғазап!»**[4]

Шуныһы үкенес: күп кеше Аллаһты иҫенә лә төшөрөп ҡарамай. Тимәк, уларға бөйөк уңыш – Йәннәт кәрәк түгел. Тамуҡҡа төшһә ни ҙә, төшмәһә ни – уларға барыбер...

## Намаҙ – Аллаһтың бер һынауы

Үҙенең Ҡөрьәнендә Аллаһ Тәғәлә былай тигән: **«Ҡулында хакимлыҡ булған һәм һәр нәмәгә ҡөҙрәте еткән *(Аллаһ)* мөбәрәк булһын! Арағыҙҙан ҡайһығыҙ күркәмерәк ғә-**

---

[2] Ҡөрьән, «Һыйыр» сүрәһе, 2:21.
[3] Ҡөрьән, «Ҡатындар» сүрәһе, 4:13.
[4] Ҡөрьән, «Ҡатындар» сүрәһе, 4:14.

**мәл ҡылғанды ҺЫНАП ҠАРАУ өсөн үлем менән тереклекте бар итеүсе! Ул – Бөйөк, Ярлыҡаусы!»**[5]

Аллаһ Тәғәлә кешенең Уға ниндәй дәрәжәлә буйһоноуын күрһәтеү өсөн был донъяла төрлө һынауҙар билдәләп ҡуйған. Шул һынауҙарҙың береһе – намаҙ. Беҙгә ошо һынауҙы дөрөҫ итеп үтергә кәрәк, ә бының өсөн көнөнә биш намаҙ үҙ ваҡытында, шарттарын үтәп, Аллаһтың ризалығы өсөн генә башҡарылырға тейеш.

Имтихандар тапшырмаған һәм ҡабул итеү шарттарын үтәмәгән кешене юғары уҡыу йортона алырҙар инеме? Хатта вузға инеү өсөн дә бит кеше 11 йыл дауамында мәктәптә уҡып әҙерләнә. Ә нисек инде кемдер, Аллаһ тарафынан бирелгән намаҙ һынауын үтәмәйенсә лә мәңгелек Ожмахҡа керермен, тип еңел генә уйлай? Намаҙ уҡыуҙан баш тартҡан кеше имтихандарға инергә лә теләмәгән абитуриент кеүек булып сыға бит.

Намаҙҙарын ҡалдырмаған кеше менән «намаҙ уҡы инде» тип ялыныусыһы булып та, намаҙын үтәүҙән баш тартҡан кешене сағыштырып буламы?! Кем Аллаһҡа ысын йөрәктән ышанып, Уға буйһона – бына шул Раббыһының ризалығына ынтыла һәм Уның алдындағы бурыстарын үтәй.

## Аллаһ беҙгә намаҙ уҡырға бойора

**«НАМАҘ тороғоҙ, зәкәт түләгеҙ һәм Рәсүлгә буйһоноғоҙ – моғайын һеҙ рәхмәт ҡылынғандарҙан булырһығыҙ!»**[6] - тип әмер итә беҙгә Аллаһ.

«Намаҙ уҡығыҙ» тигән әмер Ҡөрьәндә 15 тапҡыр ҡабатлана. Намаҙ уҡырға тейеш булыуыбыҙ тураһында Аллаһ Тәғәлә беҙгә бер генә түгел, ун биш (!) тапҡыр иҫкәрткән. Шунан һуң да беҙ быға нисек ҡарарға тейеш?!

## Ислам намаҙҙан тыш буламы?

Аллаһ рәсүле Мөхәммәт пәйғәмбәр ﷺ былай тигән: «Ислам биш терәккә нигеҙләнгән: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, һәм Мөхәммәт – Аллаһтың рәсүле, тип шәһәдәт итеү, намаҙ уҡыу, зәкәт биреү, хаж ҡылыу һәм Рамаҙан айында ураҙа тотоу»[7].

---

[5] Ҡөрьән, «Хакимиәт» сүрәһе, 67:1-2.
[6] Ҡөрьән, «Нур» сүрәһе, 24:56.
[7] Бохари, Мөслим, Тирмиҙи, Нәсәи, Әхмәд хәҙис йыйынтыҡтарынан.

Өй ҙә төп биш нәмәнән ғибәрәт: нигеҙ, диуар (стена), иҙән, түбә һәм ҡыйыҡ.

Әгәр сағыштырып күрһәтһәк, үҙеңде мосолман тип шаһитлыҡ итеү – ул Исламдың нигеҙе була, ә көндәлек биш намаҙ – уның диуары. Өй бер нисек тә диуарҙан башҡа була алмаған шикелле, Ислам да намаҙҙан башҡа була алмай.

## Ни өсөн намаҙ уҡырға кәрәк?

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә былай тигән: **«Ысынлап, Мин – Аллаһ! Минән башҡа илаһ юҡ! Миңә табын һәм Мине иҫкә төшөрөү итеп НАМАҘ уҡы!»**[8]

Намаҙ уҡыуҙың хикмәте шул: Аллаһ Тәғәләне иҫтә тотоу.

## Намаҙ – Аллаһ менән йәшерен һөйләшеү

Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ ﷺ былай тигән: «Һеҙҙең һәр берегеҙ намаҙында туранан-тура Раббыһы менән һөйләшә. Ә Раббыһы – намаҙ уҡыусы менән ҡибла араһында»[9].

Шулай уҡ, тағы бер хәҙис: «Аллаһ Тәғәлә: «Мин намаҙҙы Үҙем һәм ҡолом араһында ике өлөшкә бүлдем, һәм ҡолом ни һораһа, шуға ирешер», - тигән.

Ҡол: **«Ғаләмдәр Раббыһы Аллаһҡа – маҡтау»**[10]**,** - тигәнендә, Аллаһ: «Ҡолом Миңә маҡтау әйтте», - ти;

ҡол: **«Мәрхәмәтлегә, Рәхимлегә»,** - тигәнендә, Аллаһ: «Ҡолом Мине маҡтап рәхмәтен белдерҙе», - ти;

ҡол: **«Түләү көнөнөң Батшаһына!»** – тигәнендә, Аллаһ: «Ҡолом Мине данланы», - ти;

ҡол: **«Беҙ Һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ һәм Һинән генә ярҙам һорайбыҙ»,** - тиһә, Аллаһ: «Был Мин һәм Минең ҡолом араһында уртаға бүленәсәк, һәм ҡолом ни һораһа, уға шул бирелер», - ти;

инде ул: **«Беҙҙе тура юлдан алып бар – Үҙең ниғмәт күрһәткәндәрҙең юлынан, ә Һинең асыуыңа тарығандар һәм аҙашҡандар юлынан түгел»,** - тигәнендә, Аллаһ: «Был – Минең ҡолома, һәм ул һорағанын алыр!» - ти»[11].

---

[8] Ҡөрьән, «Таһә» сүрәһе, 20:14.

[9] Бохари, Мөслим хәҙис йыйынтыктарынан.

[10] Был хәҙистә «Фатиха» сүрәһенең аяттары тураһында һүҙ бара.

[11] Мөслим, Әхмәд, Әбү Дәүд, Тирмиҙи, Нәсәи хәҙис йыйынтыктарынан.

## Намаҙ – ул яҡшы эштәрҙең башланғысы

Аллаһ рәсүле ﷺ шулай тигән: «Ҡиәмәт көнөндә кешенән иң беренсе намаҙ тураһында һоралыр. Әгәр намаҙҙары дөрөҫ булһа, уның башҡа ғәмәлдәре лә дөрөҫ булыр, ә инде улар боҙоҡ булһа, уның башҡа ғәмәлдәре лә юҡ булыр»[12].

## Намаҙ гонаһтарҙы юя

Пәйғәмбәребеҙ ﷺ шулай тигән: «Әгәр кеше дөрөҫ итеп тәһәрәт алһа һәм намаҙ уҡыһа, уның ошо һәм бынан алдағы ике намаҙы араһындағы гонаһтары ярлыҡаныр»[13].

Аллаһ рәсүле ﷺ йәнә былай тип әйткән: «Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, әгәр берәүегеҙҙең өйө алдында йылға ағып ятһа, һәм ул көнөнә биш тапҡыр шунда йыуынһа, ул кешелә берәй бысраҡ ҡалыр инеме?» «Юҡ, бер ниндәй ҙә бысраҡ ҡалмаҫ ине», - тип яуап бирә сәхәбәләр. «Нәҡ бына шулай Аллаһ һеҙҙе биш намаҙ менән гонаһтарҙан таҙарта»[14].

Әбү Зарр исемле сәхәбә риүәйәт итеүенсә, бер мәл ул Пәйғәмбәр ﷺ менән көҙ көнө тышта бергә була. Ағастарҙан япраҡтар ҡойолған ваҡыт. Пәйғәмбәр ﷺ бер ағас ботағын тотоп ҡыбырлата, һәм ул ботаҡтың япраҡтары осоп төшә. «Эй Әбү Зарр, әгәр мосолман Аллаһ ризалығы өсөн намаҙға баҫһа, уның гонаһтары ла ошо япраҡтар шикелле унан ҡойолоп төшәсәктәр», - ти Пәйғәмбәр ﷺ [15].

## Намаҙ уҡыу – иман билдәһе

Намаҙ уҡыу – ул мөьминдәрҙең төп сифаттарынан. Аллаһ Тәғәлә иманы булғандарҙы Ҡөрьәндә былай тип тасуирлаған: **«Ә иман килтергән ир-егеттәр менән иман килтергән ҡатын-ҡыҙҙар – береһе икенсеһенә дуҫ. Улар хупланған эшкә саҡыралар һәм тыйылғандан тоткарлайҙар, НАМАҘ торалар һәм зәкәт бирәләр, Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһоналар. Уларға Аллаһ рәхмәтен ҡылыр. Аллаһ – Бөйөк, Рәхмәтле!»**[16]

---

[12] Табәрани йыйынтығынан, сәхих хәҙис.
[13] Бохари, Мөслим хәҙис йыйынтыктарынан.
[14] Бохари, Мөслим хәҙис йыйынтыктарынан.
[15] Әхмәд хәҙистәр йыйынтығынан, хәсән (яҡшы) хәҙис.
[16] Ҡөрьән, «Тәүбә» сүрәһе, 9:71.

Ғөмүмән, Ҡөрьәндә иманы булғандарҙың намаҙ уҡыуы тасуирланған аяттар бихисап.

«Минең күңелемдә ни барын Аллаһ ҡына белә. Бәлки, мин намаҙ уҡыусы, динле кешегә ҡарағанда яҡшыраҡмындыр», - тиеүселәр осрай ҡай ваҡыт. Быға яуап шулай. Мәçәлән, бер кеше һис тә ата-әсәһен тыңламай, ти. Уның: «Һеҙ минең күңелемдә ни барын белмәйһегеҙ. Бәлки, мин ата-әсәйемде башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ яратамдыр», - тигән һүҙҙәренә ышаныр инегеҙме? Күңелдәгеһе ҡылыҡтарҙа сағылырға тейеш бит. Ата-әсәйеңде яратаһың икән, тимәк, уларҙы тыңларға, ихтирам итергә лә тейешһең. Шулай уҡ, кеше лә Аллаһ Тәғәләгә буйһоноуы (йәғни, Исламды тулыһынса ҡабул итеүе) менән Аллаһҡа булған һөйөүен күрһәтә.

Кеше үҙе алдағанды яратмай. Шулай булғас, намаҙ уҡымаç өсөн әллә ниндәй сәбәптәр эҙләп, буш һылтауҙар табып, ниңә үҙен-үҙе алдай икән һуң ул? Бәлки үҙ-үҙен шулай алдай алыр ҙа, әммә бит Аллаһты алдап булмаç!

# КЕМДӘ НИНДӘЙ СӘБӘП?

## «Ваҡыты етмәгән әле»

Кешегә 10 йәш тулыу менән уның намаҙ уҡый башларға мәле етә. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ﷺ былай тигән: «Балағыҙға ете йәш тулһа, намаҙ уҡырға ҡушығыҙ. Ә инде ун йәше тулып та, намаҙ уҡымаһа, еңелсә генә һуғығыҙ һәм уларҙы айырым йоҡларға һалығыҙ»[1]. Йәғни, әгәр улы йә ҡыҙы намаҙ уҡымай киреләнә икән, ата-әсәһе уларға еңелсә генә һуғырға тейеш. Хатта бала кешегә быны өсөн һуғырға ҡушылғас (сөнки был киләсәктә баланың үҙе өсөн хәйерле буласаҡ, әле аңламаһа ла), инде оло кешеләргә намаҙ ҡалдырыуҙың ни тиклем насар икәне үҙҙәренә аңлашылырға тейештер...

[1] Әбү Дәүд хәҙистәр йыйынтығынан, хәсән (яҡшы) хәҙис.

## «Ҡартайғас уҡырмын»

Беренсенән, һин ҡартайырһыңмы һуң? Кем беҙгә, пенсияға тиклем йәшәрһегеҙ, тип гарантия биргән? Ҡасан үлереңде беләһеңме? Уйлап ҡарағыҙ, күпме кешеләр йәшләй көйө үлеп ҡала. Икенсенән, эйе, яҡшы, ҡартлығың намаҙ менән үтер, ти, әммә Аллаһ алдында намаҙһыҙ үткән йәшлегең өсөн ни тип яуап бирерһең?

## «Хәҙер һуң инде»

Намаҙ уҡырға үлгәс кенә һуң була.

Аллаһ Тәғәлә Үҙенең Китабында былай тигән: **«Уларҙың берәйһенә үлем килһә, ул: «Раббым, ҡайтар мине, - тиер, – бәлки мин үҙемдең ҡалдырған нәмәмдә изгелек эшләрмен». Юҡ һәм юҡ! Был уның әйткән һүҙҙәре генә! Уларҙың артында улар ҡәберҙән сығарыласаҡ көнгә тиклем ҡорма тора»**[2].

Йәғни, инде был донъянан киткәндәр, тегендәге хәлдәрҙе күргәс, бик тә кире ҡайтып намаҙҙарын уҡырҙар ине лә. Әммә инде юҡ! Кире ҡайтып булмай...

## «Мин гонаһлы»

Һәр кеше аҙмы-күпме гонаһ ҡыла. Ә тап намаҙ кешене гонаһ ҡылыуҙан тыя ла инде. Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә былай ти: **«... Намаҙ тор, намаҙ фәхешлектән һәм ярамаған башҡа эштәрҙән тыя бит...»**[3]. Шуға ла, әгәр кеше «гонаһтарым күп» ти икән, тимәк, уға гонаһтарын кәметер өсөн айырыуса күберәк намаҙ уҡырға кәрәк.

## «Мин тәмәке тартам», «хәмер эсәм»

Тәмәке тартыу гонаһ булһа ла, ул намаҙ уҡыуға кәртә түгел. Тәмәке тартыу – гонаһ, әммә намаҙ уҡымау – тәмәке тартыу гонаһынан күпкә-күпкә ҙурыраҡ гонаһ. Шуға ла тәмәке тартып та намаҙлы булыуың хәйерлерәк (был тәмәке тартыуға саҡырыу түгел – был намаҙ уҡыуға саҡырыу!).

Кемдер: «Мин эскене ташлағас ҡына намаҙ уҡый башлар-

---

[2] Ҡөрьән, «Иманлылар» сүрәһе, 23:99-100.

[3] Ҡөрьән, «Үрмәксе» сүрәһе, 29:45.

мын», - ти. Ә ташламаһаң?.. Һин башла һәм, иншә Аллаһ, эскеңде лә ташларһың! Намаҙ уҡый башлағандан һуң тартыуын да, эсеүен дә ташлаған кешеләр күп, әлхәмдүлиЛләһ. Аллаһҡа яҡынайырға теләгән кешегә Раббыбыҙ, һис шикһеҙ, Үҙенең ярҙамын бирә!

Ҡайһы бер хәҙрәттәр, тәмәке тартыусыларҙы был насар ғәҙәттәренән арындырыу өсөнмө икән, «тартыу тәһәрәтте боҙа» тиҙәр. Ә тәмәке тартыусыға һәр намаҙ алдынан тәһәрәт алыу ауыр тойола башлай, һәм шуны сәбәп итеп улар, тартыуҙы ташлар урынға, намаҙҙарын ташлайҙар. Ә бит, асылда, тәмәке тәһәрәтте боҙмай.

## «Минең хәтерем насар»

Хәтере ысынлап та насар булған кешеләр бик һирәк кенә осрай. Ә инде кәрәккәндә генә «хәтерҙәре насарайған» кешеләр – йыш.

Ысынында ла хәтере насар булған кеше нимә ашағанын, ҡайҙа барғанын, кемде күргәнен, ни менән шөғөлләнгәнен дә хәтерләмәй. Һеҙ ҙә шундайҙарҙанмы ни?

Әгәр ҙә кеше бер нисек тә намаҙҙағы доға-сүрәләрҙе иҫендә ҡалдыра алмай икән, ул намаҙҙы шул доға-сүрәләр яҙылған ҡағыҙға ҡарап булһа ла уҡыһын.

## «Минең ваҡытым юҡ»

24 сәғәттең ғәҙәттә 16 сәғәтен һин уяу үткәрәһең. Бер намаҙҙы уҡыр өсөн һанаулы ғына минуттар талап ителә. Ә-ә, һинең бөтә көнөң һәр минутына тиклем төрлө эштәргә бүленеп яҙылып ҡуйылғанмы? Яҡшы. Тик үҙеңдең был фани (ваҡытлыса) донъялағы бер нисә кескәй эшеңде мәңгелек Ожмахыңа алыштырыу отошлораҡ булмаҫмы икән? Намаҙ өсөн бер нисә минут ваҡыт тап. Бүтән эштәрең өсөн күпмелер ваҡыт юғалтһаң да, әммә шул арҡала киләһе донъялағы мәңгелеккә (!) эйә булырһың.

## «Күберәк саҙаҡа бирергә тырышырмын, һәм Аллаһ мине ғәфү итер»

Ундай ныҡлы ышаныс нимәнән килә ул? Аллаһ беҙгә ниндәйҙер әмер бирә һәм уның үтәлешен һорай. Саҙаҡа – ул бик һәйбәт, әммә бит намаҙҙы Аллаһ кәңәш итеп кенә ҡалмай (са-

ҙаҡаны иткән кеүек), ә бойора. Уйла, үҙеңә ҡарата ғәҙелһеҙ булма. Һәм, белгең килһә, сәхәбәләр, һәр береһе Ислам тарихында сағыштырғыһыҙ саҙаҡалар биреүенә һәм бүтән эштәр эшләүенә ҡарамаҫтан, һуңғы көндәренә тиклем бер намаҙын да ҡалдырмай уҡыған.

## «Әле яулыҡ ябынып, оҙон итәк кейеп йөрөй алмайым»

*1)* Яулыҡ та, итәк тә – ҡатын-ҡыҙ кейемдәре. Мосолман ҡатын-ҡыҙына ошо кейемдәрҙе кейеү оят булырға тейешме ни? Тәүге мәлдә, бик ситен булһа, намаҙ ваҡытында ғына булһа ла кейенеп уҡырға мөмкин. Һәр хәлдә, белегеҙ, ҡәҙерле нәмә кеше күҙенән йәшерен була. Ҡатын-ҡыҙҙың да тәне – үҙенең законлы ире өсөн бүләк, ә сит ир-аттар уны күреп йөрөмәһен.

*2)* Һалҡында барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар ҙа баштарын да ҡаплай, оҙон булған йылы кейем дә кейә, һәм уларҙан бер кем көлмәй.

*3)* Ҡатын-ҡыҙҙар йәй көндәрендә ярым шәрә йөрөүҙәренән оялмайҙар. Ә ниңәлер оят ерҙәрен ҡаплауҙан оялалар. Кейенгән өсөн оялырға кәрәкмәй – кейенмәгән өсөн оялырға кәрәк!

*4)* Эшселәр үҙҙәренең спецовкаларынан оялмай. Кәрәккәнендә противогаздарҙан да оялмайҙар, талашып-талашып кейәләр. Мосолманса кейенеү ҙә шулай кәрәк – аңлағыҙ...

## «Был бит үтә лә яуаплы эш»

Эйе, һин хаҡлы, намаҙ уҡыу – ул Аллаһ менән бәйләнешкә инеү, был бик яуаплы эш! Намаҙ уҡыған кешегә буйы менән тик яҡшы яҡҡа үҙгәреп барырға тура киләсәк, ә был күптәр өсөн бик ҡыйын. Әммә, әйҙә, һорауға объектив ҡарайыҡ. Ҡиәмәт көнөндә кешенән иң тәүҙә һораласаҡ нәмә – намаҙ. Шулай булғас, намаҙ уҡымай йөрөү – ул намаҙ уҡыуға ҡарағанда ла яуаплыраҡ эш бит, нисек уйлайһығыҙ?

## «Миңә эштә (уҡыуҙа) рөхсәт итмәйҙәр, уңайһыҙ»

Һине аңларға теләмәгән кешеләр алдында уңайһыҙмы? Кешеләрҙән оялаһың, әммә һине һәр ваҡыт күреп тороусы Аллаһ алдында уңайһыҙланмайһың. Үҙең нисек уйлайһың: Аллаһ алдында уңайһыҙланыр кәрәкме, әллә кешеләр алдындамы?

Эйе, эштә намаҙ уҡыуҙары арҡаһында ҡайһы берәүҙәр ҡыйырһытыла, әлбиттә, беҙҙең бөгөнгө йәмғиәт бит шундай бик алама хәлдә. Әммә кешеләрҙән ҡурҡып намаҙ ҡалдырғаның өсөн Ҡиәмәт көнөндә күпкә ҡыйыныраҡ булыр шул ул. Кешеләрҙән ҡурҡма, тик Аллаһтан ғына ҡурҡ һәм Аллаһтың әмерҙәрен үтә, тыйғандарынан тыйыл – ошо инде ысын Ислам! Ислам – ул үҙ-үҙеңде Аллаһ Тәғәләнең әмеренә тапшырыу, тигән һүҙ. Әгәр һин үҙ-үҙеңде Аллаһ Тәғәләнең ҡоло итеп, Уға тапшырғанһың икән (йәғни Ислам ҡабул иткәнһең икән), һин кеше һүҙенә иғтибар итергә тейеш түгелһең.

## «Фанатизм бит был»

Фанатизм – ул нимәгәлер мөкиббән китеп, аҡылды юғалтырҙай булып бирелеү. Мәҫәлән, донъяға. Уйла әле, бәлки һин үҙең фанатикһыңдыр? Ә мосолман – ул Аллаһҡа буйһоноп, Ислам дине ҡушҡанды үтәп йәшәүсе кеше. Аллаһ намаҙ уҡырға ҡушҡан икән, ул шул намаҙҙы уҡый, һәм ҡайҙа инде бында фанатизм?

## «Эстән ышанғас, шул еткән»

Эйе, әлбиттә, эстән ышаныу – иң мөһиме. Һин ышанаһың, ти, әммә нимәгә ышанаһың? Әгәр Аллаһҡа ышанаһың икән, бел: Ул бөтәбеҙгә лә намаҙ уҡырға ҡушҡан. Аллаһҡа ышанам, тиһеңме? Улай булғас, әйҙә, Ул бойорғанды үтәй башлайыҡ, туғаным! Юҡһа һин, «Мин ата-әсәйемде хөрмәт итәм», тип тә, уларҙың бер һүҙен дә ҡолаҡҡа алмаған балаға оҡшашһың. Аллаһҡа ышанған кеше Уның әмер-бойороҡтарына ла иғтибарлы була, Уның әйткәндәре тураһында уйлана.

## «Мин былай ҙа яҡшы кеше»

Һинең яҡшы кеше булыуың – ошо фани донъя өсөн. Яҡшы холҡоң сәбәпле һине ихтирам итерҙәр, дуҫ булырҙар һәм хатта, бәлки, бүтәндәргә үрнәк итеп тә һөйләрҙәр. Ә намаҙ уҡыу – ул киләһе мәңгелек донъя өсөн. Киләһе донъяға ышанған кеше иң тәүҙә намаҙҙары тураһында ҡайғыртыр ине.

## Аҡланырға сәбәп ҡалмағас...

Инде аҡланырлыҡ сәбәптәре ҡалмаған ҡайһы бер кеше-

ләр: «Ярар, ярар, тиҙҙән намаҙ уҡый башлармын», - тиҙәр. Ҡасан була һуң ул «тиҙҙән»? Был осраҡта «тиҙҙән» тигән һүҙең «хәҙер үк» булһын ине. Намаҙ – ул үҙ ваҡытында үтәлә торған ғәмәл! Шуға күрә ни өсөн уны аҙаҡҡа ҡалдырыр өсөн һылтауҙар эҙләп торорға?!

Ни өсөн эскеселәр: «Эсергә ваҡытым юҡ, һуңынан эсермен әле», - тип әйтмәй? Ни өсөн тартыусылар: «Миңә тартырға иртәрәк әле», - тимәйҙәр? Ни өсөн берәү ҙә: «Пенсияға сыҡҡас ҡына алдай, ғәйбәт һөйләй, кеше «сәйнәй» башлармын инде, әле кешесә йәшәп ҡалыр кәрәк», - тип һылтанмай? Намаҙ, ураҙа тураһында һүҙ сыҡҡанда ғына, дәресен әҙерләмәй килгән уҡыусы шикелле, һәр кем һәләтенән килгәнсә сәбәптәр уйлап сығара башлай.

Аллаһҡа ҡол булыуҙан ситләшәһегеҙ, әллә шайтан менән бергә булыуҙы рәхәтерәк күрәһегеҙме? Әммә белегеҙ: шайтан – һеҙҙең был донъялағы иң яуыз, иң мәкерле, иң хәйләкәр, иң аҫтыртын, иң рәхимһеҙ, иң алдаҡсы дошманығыҙ! Намаҙ уҡымай үлеп киткәндән һуң үҙегеҙҙең ни тиклем алданған булыуығыҙҙы аңларһығыҙ, әммә һуң булыр шул...

# НАМАҘ УҠЫРҒА ВАҠЫТ!

## Тәүлеккә биш намаҙ

Аллаһ Тәғәлә Үҙенең хикмәте һәм мәрхәмәте менән тәүлегенә биш кенә намаҙҙы фарыз (мотлаҡ тейешле) иткән. Был әмере пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең ﷺ Күккә менеү төнөндә – Миғраж төнөндә төшөрөлә. Тәүҙә Аллаһ Тәғәлә көнөнә илле (50) намаҙ фарыз иткән булған. Шунан, Пәйғәмбәребеҙ ﷺ Унан бер нисә тапҡыр еңеллек һорағас, Раббыбыҙ намаҙҙарҙы бишәүгә генә ҡалдыра. Әммә әжере иһә шул килеш ҡала. «Был донъяла биш (намаҙ) булыр, ә Ахирәттә – илле (намаҙ сауабы), сөнки Мин Һүҙемдә торам», - тигән Аллаһ»[1].

[1] Бохари хәҙистәр йыйынтығынан, хәҙистән бер өлөш.

## Тәүлегенә 5 тапҡыр фарыз (мотлаҡ тейешле) булған намаҙҙарҙың ваҡыттары:

| Ниндәй намаҙ? | Нисә рәкәғәт? | Ҡайһы ваҡытта? |
|---|---|---|
| **Иртәнге намаҙ** ***(сабах, фәджр)*** | **2** **(ике рәкәғәт)** | Таң яҡтылығы беленгәндән алып, ҡояш сыға башлағансы |
| **Төшкө намаҙ** ***(өйлә, ҙуһр)*** | **4** **(дүрт рәкәғәт)** | Ҡояш төш ваҡытынан *(иң бейек нөктәһенән, йәғни зениттан)* ауышҡандан алып, икенде намаҙының ваҡыты ингәнсе |
| **Төштән һуңғы намаҙ** ***(икенде, ғаср)*** | **4** **(дүрт рәкәғәт)** | Әйберҙәрҙең күләгәһе зенит ваҡытындағы күләгәгә өҫтәп әйберҙең тағы үҙ бейеклеге хәтле оҙонайған мәлдән алып, ҡояш тулыһынса байып бөткәнгә тиклем |
| **Киске намаҙ** ***(аҡшам, мәғриб)*** | **3** **(өс рәкәғәт)** | Ҡояш тулыһынса байыған мәлдән алып, көнбайыш офоҡ яҡтылығы *(шәфәҡ яҡтылығы)* тулыһынса һүрелгәнгә тиклем |
| **Төнгө намаҙ** ***(йәстү, ғишә)*** | **4** **(дүрт рәкәғәт)** | Шәфәҡ яҡтылығы бөткән ваҡыттан алып, таң беленә башлағанға тиклем |

**Иҫкәрмә:** *Ҡояш ҡалҡып килгән, ҡояш байып барған һәм ҡояш зенитта торған мәлдәрҙә намаҙ уҡырға кәңәш ителмәй.*

## Биш намаҙҙы бер ваҡытта йыйып уҡырға яраймы?

Был турала Аллаһ Ҡөрьәндә: **«Дөрөҫлөктә, мөьминдәр өсөн намаҙ – ваҡыты билдәләнгән йөкләмә»,** - тигән[2].

Мәҫәлән, табип ауырыу кешенең сәләмәтлеге өсөн бик тә кәрәкле булған дарыуҙы тәүлегенә биш тапҡыр билдәле бер ваҡыт аралығында теленә берәр тамсынан 3-4 минут дауамында тамыҙып торорға ҡушты, ти. Әгәр ҙә сирле кеше табип ҡушҡандарҙы үтәмәһә, бер нисә айҙан һуң сире көсәйеп, түҙә алмаҫлыҡ ауыртыуҙар башланасағы билдәле, ти. Шундай осраҡта ауырыу кеше табип ҡушҡандарҙы теүәл үтәрме, әллә ул дарыуҙы ситкә ташлап ҡуйырмы, әллә онотҡанда бер тапҡыр яҙа-йоҙа тамыҙырмы, әллә бер көндә бөтә дарыуҙарҙы бер ыңғайы йотормо? Ә бит намаҙ теләһә ниндәй дарыуға ҡарағанда ла мөһимерәк. Сөнки дарыу был донъялағы ваҡытлы ауыртыу-һыҙланыуҙарҙан ғына ҡотҡарһа, намаҙ иһә МӘҢГЕЛЕК теге донъялағы ғазаплы Тамуҡ тормошонан аралай. Ысынлап, былдай миҫалдарҙа аҡылдары булғандар өсөн ҙур һабаҡ бар!

Намаҙ уҡыу менән кешенең иманы арта, йәне тыныслыҡ таба, Аллаһ менән бәйләнештәре нығый. Шулай уҡ, намаҙ уҡыған һайын кешенең кесе гонаһтары, төрлө хаталары һәм яҙыҡ эштәре ғәфү ителә һәм өҫтәмә сауап яҙыла (оло гонаһтар өсөн айырым тәүбә итер кәрәк).

## Намаҙ ваҡыты һинеке түгел – Аллаһтыҡы

Намаҙҙың бер өлөшөн, йәғни бер рәкәғәтен уҡыу өсөн 1-2 минут ваҡыт китә. Ә көндәлек 5 намаҙ бөтәһе 17 рәкәғәттән ғибәрәт. Шулай итеп, биш намаҙҙы уҡыр өсөн көнөнә ни бары уртаса 24 минут (!) ваҡыт етә, килеп сыға. Теләгән кеше үҙе лә быны тикшереп ҡарай ала. Нәҡ бына ошо 24 минут – фәҡәт Аллаһҡа табыныу өсөн бирелгән ваҡыт. Был ваҡыт һинеке түгел – Аллаһтыҡы, уны Аллаһ Тәғәлә һиңә Үҙен маҡтап, иҫтә тотоу өсөн биргән.

24 минут – ул тәүлектең 1/60 өлөшө, йәғни 60 тапҡыр 24-шәр минут! Уларҙың 59-ы – һинеке, ә берәүһен һин Аллаһҡа бағышларға тейешһең. Алтмыштан бер күпме ни шулай? Бер

---

[2] Ҡөрьән, «Ҡатындар» сүрәһе, 4:103.

сәғәттең 1 минуты һымаҡ бит ул. Йә бер минуттың 1 секунды ғына һымаҡ.

Мәҫәлән, һин бер кешегә көн һайын 60 алма бүләк итеп тораһың, ти. Һәм унан: «Берәүһен миңә лә ашатмаҫһың микән?» - тип һорағас, ул: «Юҡ!» - тиһә, ә үҙе алмаларының күпмелер өлөшөн ашап, ҡайһы бер өлөшөн бүтән кешеләргә биреп, бер аҙын бөтөнләй сығарып ташлап торһа, һин ни тиер инең? Ә шулай йылдар буйы ҡабатланып торһон әле... Аҡыллыға ишара! Намаҙ уҡымаусы кеше лә бит шулай: Аллаһ уға күпме ваҡыт биргән, ә ул шуның 1/60 өлөшөн Аллаһҡа бағышларға ҡыйынһына, ә үҙе теләһә нимәгә сарыф итә.

## Аллаһтан урлап башҡаларға бирә

Хужа эшсеһенә эш хаҡы, премиялар түләй икән, ти. Ә тегеһе эш ваҡытында башҡа эштәр менән булыша. Эшсеһенән риза булырмы был хужа? Әлбиттә, юҡ! «Һин нимә, был – минең ваҡыт! Шуның өсөн аҡса алып ятаһың бит!» - тип әйтәсәк ул. Сөнки эш ваҡытында бүтән нәмәләр менән булған кеше эш биреүсеһенең ваҡытын урлай.

Намаҙын уҡымаусы кеше лә шулай уҡ: ул Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға тейешле ваҡытты, Раббыһынан урлап, башҡаларға бирә. Үҙегеҙ ҙә иғтибар итеп ҡарағыҙ, кеше үҙенә, ғаиләһенә, туғандарына, дуҫтарына, таныш һәм таныш булмаған кешеләргә күпме ваҡытын бағышлай, хатта ки буш һүҙҙәр һөйләп һәм гонаһлы эштәр ҡылып исраф итә? Ә Аллаһҡа бирергә тейеш булған 24 минутын иһә йәлләй...

## Намаҙ уҡыу – ул Аллаһҡа шөкөр итеү

Әгәр кемдер: «Намаҙ уҡырға ваҡытым юҡ», - тиһә, мин уға: «Ә ваҡытты һиңә кем биргән һуң? Кем һуң һине был донъяға килтергән?» - тиер инем.

Йөрәк тибешендә тыңлап ҡара әле, әллә һинең йөрәк үҙенән-үҙе тибә тип уйлайһыңмы? Бер нәмә лә үҙенән-үҙе генә бар булмай. Әгәр ҙә Аллаһ Тәғәлә йөрәгеңде туҡтатһа, кем уны кире эшләтеп ебәрә алыр? Был осраҡта хатта «Ашығыс ярҙам» да килеп өлгөрмәҫ! Аңла: һиңә ғүмерҙе Аллаһ Тәғәлә биргән һәм фәҡәт Ул ғына һине әле тере килеш һаҡлап килә. Хатта бит үҙ әсәйең дә һинең йөрәгеңдең беренсе тапҡыр ҡасан тибә башлағанын белмәй. Йөрәгеңдең һәр тибеше – ул

Аллаһтың бүләге. Йәғни, шулай итеп, һинең ғүмереңдең һәр секунды, һәр көнө – Аллаһ Тәғәләнең бүләге, оло ниғмәте. Ә хәҙер күҙ, ҡолаҡ, үпкә, бауыр, бөйөрҙәр, ауыҙ, тел, ҡулдар, аяҡтар тураһында үҙегеҙ фекер йөрөтөп ҡарағыҙ әле. Уларҙың береһе генә булмаһа ла, һеҙгә нисек ҡыйын булыр ине. Ә һеҙҙе шул ағзалар менән ниғмәтләгән Аллаһҡа көнөнә 24 минутығыҙҙы йәлләү оят түгелме?

## Кешенең йөрәк тибеше ни хаҡ тора?

Ҡай саҡта кешенең ғүмерен яһалма рәүештә тоторға, яһалма һулыш алдырырға тура килә. Мәҫәлән, махсус аппарат ярҙамында ваҡытлыса ғына булһа ла йөрәк тибешен һаҡларға тырышалар. Бына шундай хәлдә ҡалған кеше йөрәге типһен өсөн күпме аҡса түләр ине икән? Йөҙ һуммы? Мең һуммы? Юҡ, миллиондар түләп алыр ине, әгәр улары булһа!

Аллаһ Тәғәлә йөрәк тибешен туҡтатһа, кешегә бүтән бер нәмә лә кәрәкмәҫ. Һәр кемебеҙ өсөн йөрәгебеҙҙең бер тибеше генә лә бөтә донъя малынан ҡиммәт. Әммә төрлө сир-ауырыуҙар беҙҙе Аллаһ мәрхәмәте менән урап үтеп торғас, беҙ шул һәр көн, һәр секунд һайын һис ҡаршылашмайса, бер туҡтауһыҙ һәм бушлай тибеп торған йөрәгебеҙ өсөн дә Аллаһҡа шөкөр итергә онотабыҙ.

Ә күреү һәләте, күҙҙәр? Улар һуҡырайһа, беҙ күпме аҡсалар түгеп операция эшләтергә әҙербеҙ! Ә йөрөү һәләте, аяҡтар? Һынһа ғына ҡәҙерен аңлайбыҙ... Был ниғмәттәрҙе һанап бөтөргөһөҙ. Барыһына ла түләһәк, күпме аҡса эшләһәк тә етмәҫ. Ә Аллаһ шулар өсөн беҙгә бары биш намаҙ уҡыуҙы йөкмәгән.

## Ниңә һаман һатыулашаһың?

«Намаҙҙарҙы уҡыу өсөн тәүлегенә 24 минут ваҡыт етә», - тиһәң, ҡай берәүҙәр уныһын да күп күргән була. Аллаһ Тәғәләгә маҡтауҙар әйт: Ул бит көстән килгәнде генә ҡуша, тәүлегенә һигеҙ сәғәт буйы намаҙ уҡырға бойормаған да баһа!

Бахыр пенсия өсөн кешеләр көн һайын нисә сәғәт тир түгә? Етмәһә, пенсияға тиклем йәшәй аламы, юҡмы – уныһы ла билдәһеҙ әле. Пенсияға сыҡһа ла, нисә йыл пенсияла йәшәр? Ә намаҙға килгәндә, нисек инде кеше, тәүлегенә 24 минутын да Аллаһ өсөн бағышларға йәлләп, мәңге Ожмахта йәшәргә өмөт итә ала икән?!

Ниңә һин һаман да һатыулашаһың? Аллаһ Тәғәлә бит һинең бәлиғ сағыңдан уҡылмай тороп ҡалған намаҙҙарыңды һорамай. Ә шул уҡылмайынса ҡалған намаҙҙарыңды ла һораһа, ни эшләр инең? Күп кешеләр бит, ни ҡәҙәр тырышһалар ҙа, элек уҡылмаған намаҙҙарын ҡайтарып бөтөрә алмаҫтар ине.

### Намаҙҙы мәжлес алмаштырмай

Ҡайһы бер кешеләр: «Эйе, беҙ намаҙ уҡымайбыҙ һәм был гонаһыбыҙҙы таныйбыҙ. Шуға күрә йылына бер тапҡыр мәжлес йыябыҙ, аят уҡытабыҙ», - тиҙәр. Намаҙын уҡымаған кеше көнөнә биш мәжлес үткәрһә лә, һәр берееһендә меңәр кеше ашатһа ла, уның Аллаһ ҡаршыһында булған бурысы өҫтөнән төшмәйәсәк. Көнөнә биш намаҙ – ул һәр кеше өсөн фарыз, мотлаҡ! Һәр кеше өсөн! Һәм уны бер ниндәй бүтән яҡшы эш тә алмаштыра алмаясаҡ. Бер ҡасан да! Аҡылға килегеҙ берүк, халыҡ, намаҙға баҫығыҙ инде!

## НАМАҘ УҠЫМАҒАН ӨСӨН

### «Беҙ белмәнек» тип әйтеп булырмы?

Аллаһ ҡушҡанын үтәмәгән кеше гонаһ ҡыла. Әгәр ҙә кеше гонаһы өсөн тәүбә итмәһә, уға ғазап тейешле буласаҡ. Ул ғазап был донъяла ла, ҡәберҙә лә, Ҡиәмәт көнөндә һәм Мәңгелек тормошта ла булыуы мөмкин. Һуңғыһы – иң ауыры.

Ҡиәмәт көнөндә күпселек кеше намаҙ тураһында һоралғанда: «Мин намаҙ уҡырға кәрәклеген белмәнем», - тип әйтә алмаясаҡ. Телевизорҙан мосолмандарҙың намаҙ уҡығанын күрһәтмәйҙәрме ни, гәзиттәрҙә был турала яҙмайҙармы? Хатта мосолман булмаған кешеләр ҙә мосолмандарҙың намаҙ уҡырға тейеш икәнен белеп тора бит!

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә былай тигән: **«Уларҙы Тамуҡҡа ташлаған саҡта уның үкереүен ишетерҙәр, ул ҡайнап**

**тороп. Асыуҙан ул ярылырға яҡын булыр. Уға һәр төркөмдө ырғытҡан һайын, уның һаҡсылары: «Һеҙгә иҫкәртеүсе өгөтләүсе килмәнеме ни?» - тип һорар. Тегеләр: «Эйе, беҙгә иҫкәртеүсе өгөтләүсе килде, әммә беҙ уны алдаҡсы тинек һәм: «Аллаһ бер нәмә лә ебәрмәгән *(ҡушмаған)*, һеҙ фәҡәт ҙур аҙашыуҙа», - тип әйттек», - тиерҙәр. Һәм улар: «Әгәр беҙ тыңлаған һәм аңлаған булһаҡ, бында булмаҫ инек», - тиҙәр. Улар үҙ гонаһтарын таный. Китегеҙ бынан, Ут әһелдәре!»**[1]

## Был донъялағы ғазап

Аллаһ Тәғәлә: **«Һеҙгә ҡағылған һәр бәлә-ҡаза – ҡулдарығыҙ тапҡан нәмә *(йәғни, үҙегеҙ ҡылған гонаһтар)* арҡаһында, ә бит Ул күбеһен ғәфү итә әле»**[2], - тигән.

Шуға ла, кемгәлер берәй бәлә-ҡаза килһә, ул иң тәүҙә үҙенең уй-ғәмәлдәренә байҡау яһарға тейеш: уның бөтә эшләгән эштәре лә Аллаһ Тәғәлә ҡушҡансамы, харам ғәмәлдәр ҡылмаймы, ярамаған һүҙҙәр һөйләп йөрөмәйме? Ә инде кеше намаҙ ҙа уҡымай икән, ул ваҡыты-ваҡыты менән килеп торған бәлә-ҡазаларға ҡайғырырға түгел, ә бөтә тормошо тотошлайы менән ҡайғы-хәсрәттән тормағанға шөкөр итергә тейеш әле. Белә тороп та намаҙ уҡымаған, күрәләтә гонаһ ҡылып йөрөгән кеше иң түбәнселекле тормошҡа лайыҡ, әммә Аллаһ Тәғәлә беҙҙең күпселек яҙыҡ эштәребеҙҙе Үҙ мәрхәмәтлелеге менән ғәфү итә килә, ә ҡайһы бер гонаһтарыбыҙ өсөн язаларҙы ҡәбергәсә һәм Ҡиәмәт көнөнәсә кисектергән. (Ә наҙан кеше иһә, гонаһы өсөн был донъяла уҡ ҡаты язаланмағас, Аллаһтың ғөмүмән яза бирә алырына шикләнеп тә ҡуялыр әле ҡай саҡ...).

Шулай уҡ, Үҙенең ҡолдарына был донъяла ҡайғы-һынауҙар биреп, уларҙың тиҙ арала тәүбәгә килеүен, ҡылған гонаһтары өсөн үкенеүен һәм тулыһынса Уға буйһоноуын теләй Аллаһ Тәғәлә. **«Кешеләрҙең үҙ ҡулдары ҡаҙанған нәмәләр сәбәпле, ҡылған эштәренең һөҙөмтәһен бер аҙ татып ҡараһындар өсөн ерҙә һәм диңгеҙҙә яуызлыҡ ҡалҡа. Ихтимал, бәлки улар кире (тура юлға) ҡайтыр»**[3], - тигән Ул.

---

[1] Ҡөрьән, «Хакимиәт» сүрәһе, 67:7-11.
[2] Ҡөрьән, «Кәңәш» сүрәһе, 42:30.
[3] Ҡөрьән, «Рум» сүрәһе, 30:41.

Әйткәндәй, күп кенә кеше Аллаһты шул ҡыйынлыҡтар аша таный башлай бит. Тимәк, был һынау уның өсөн хәйер генә булған. Ғөмүмән, төрлө хәл-ваҡиғаларҙан беҙ дөрөҫ һығымталар яһай белергә тейешбеҙ.

## Ҡәберҙәге яза

Пәйғәмбәребеҙ ﷺ әйткән: «Фәрештәләргә ҡәберҙә ятыусы Аллаһтың бер ҡолона йөҙ тапҡыр һуғырға әмер бирелде. Был кеше Аллаһтан бик үтенеп, ялбарып язаны еңеләйтеүҙе һораны. Шунан һуң Аллаһ Тәғәлә язаны кәметте – был кешене бер генә тапҡыр һуҡтырырға әмер булды. Шул бер тапҡырҙы һуҡҡас, ҡәбер ут менән тулды. Ут һүнгәндән һуң был кеше аңына килде һәм: «Ни өсөн миңә бындай яза?» - тип һораны. Уға: «Бер ваҡыт һин намаҙыңды тәһәрәтһеҙ уҡының. Һәм, шулай уҡ, бер ваҡыт ауыр тормоштан иҙелгән һәм яфаланған кеше янынан үткәндә уға ярҙам итмәнең», - тинеләр»[4].

Бер тапҡыр тәһәрәтһеҙ уҡылған намаҙ өсөн!..

## Ҡиәмәт көнөндәге ғазап

Аллаһ Тәғәлә: **«Һәм ҡайғы (ундай) намаҙ уҡыусыларға – намаҙҙарына иғтибарһыҙ булғандарға»**[5]**,** - ти.

Намаҙына еңел ҡараған, уны тейешенсә үтәмәгән кешеләргә Бөйөк Аллаһ ҡайғы вәғәҙә иткәс, намаҙын бөтөнләй уҡымаған кешеләрҙе ниҙәр көтә икән?..

## Мәңгелек ғазап

Намаҙ уҡырға кәрәклеген белә тороп, уны ситкә ҡуйыусылар – Ахирәттә Утта яныусылар. Был турала Аллаһ Үҙенең китабында шундай хәбәр бирә. Йәннәттәге кешеләр Тамуҡ утында яныусыларҙан: **«Сәҡарға һеҙҙе нимә килтерҙе?»**[6] - тип һорағас, **«Улар: «Беҙ намаҙ уҡыусылар араһында булманыҡ», - ти»**[7]. Сәҡар – Тамуҡ атамаларының береһе.

Аллаһ беҙҙе барлыҡ был ғазаптарҙан һаҡлаһын, беҙҙе намаҙҙарын ҡалдырмай уҡыусы мөьминдәрҙән итһен ине!

---

[4] Тахауи китабынан, хәсән (яҡшы) хәҙис.
[5] Ҡөрьән, «Хәйер-саҙаҡа» сүрәһе, 107:4-5.
[6] Ҡөрьән, «Кейеменә бөркәнгән» сүрәһе, 74:42.
[7] Ҡөрьән, «Кейеменә бөркәнгән» сүрәһе, 74:43.

# ТУҒАНДАРҘЫ САҠЫРЫУ

## Ғаилә башлығының оло яуаплылығы

Ғаилә башлығы үҙенең өй әһелдәренә намаҙ уҡырға ҡушырға тейеш. Аллаһ Тәғәлә әйтә: **«Үҙ ғаиләңә намаҙ ҡылырға ҡуш, үҙең дә уны түҙемлек менән ҡыл. Беҙ һинән ризыҡ һорамайбыҙ, Беҙ бит Үҙебеҙ һине туйҙырабыҙ. Ә хәйерле ахыр – тәҡүәлектә»**[1].

## Туғаныңды Утҡа ебәрмә!

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә: **«Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Үҙегеҙҙе һәм ғаиләләрегеҙҙе яғыулығы кешеләр һәм таштар булған Уттан һаҡлағыҙ! Уның өҫтөндә көслө һәм ҡаты күңелле фәрештәләр, Аллаһ ҡушҡанға ҡарышмайынса, нимә ҡушылһа, шуны эшләйҙәр»**[2], - тигән.

Яҡын кешең, белмәйенсә, янғын сыҡҡан өйҙә тороп ҡалған булһа, ни эшләр инең? Һин бит уны нисек кенә булһа ла янып торған өйҙән саҡырып сығарырға тырышырһың! Әгәр ҙә өйҙә ҡалған кеше ҡотҡарыусының һүҙҙәренә ышанмаһа, был шаярыу ғына тип уйлаһа, уны ҡулдарынан һөйрәп булһа ла сығарыр инең бит! Сөнки һин беләһең: өй яна, ә ул хәҙер һәләк буласаҡ.

Ысынлап, белә тороп намаҙ уҡыуҙан баш тартҡан кеше үлгәс тә үк утҡа төшәсәк. Иң тәүҙә уның ҡәбере ут менән тула, сөнки ундай кешенең ҡәбере – Йәһәннәм соҡорҙарының береһе. Шунан һуң Ҡиәмәт көнөндә лә унан намаҙҙары тураһында һорарҙар. Белә тороп намаҙҙарын уҡымай йөрөгән кешенең бүтән ғәмәлдәре лә ҡабул ителмәҫ. Һәм, әгәр Аллаһ Тәғәлә уны Үҙ мәрхәмәтлелеге менән ғәфү итмәһә, ундай кешенең хәле бик аяныслы.

Был донъя утынан кеше ҡурҡа, һаҡлана – бер кешенең дә янғыһы килмәй, яҡын кешеләренең дә яныуын теләмәй. Ни өсөн һуң беҙ яҡын кешеләребеҙҙең Йәһәннәм утына китеп барыуҙары хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә йөрөйбөҙ? Йәһән-

---

[1] Ҡөрьән, «Таһә» сүрәһе, 20:132.
[2] Ҡөрьән, «Харам ҡылыу» сүрәһе, 66:6.

һәм уты бит был донъя утынан күп тапҡырҙарға көслөрәк, ҡыҙыуыраҡ!

Кемдер үҙе намаҙ уҡый, ә ҡатынына, балаларына, ата-әсәһенә бер ҙә: «Аллаһҡа буйһоноп йәшәгеҙ», - тип өндәшмәй. Бәлки, беҙҙең яҡын кешеләребеҙ араһында шундайҙары барҙыр – уларға һәйбәтләп аңлатһаң, намаҙға ла баҫырҙар ине...

Шайтан да тик тормай: «Был кешене намаҙ уҡырға өндәп торма, барыбер файҙаһы булмаясак!» - тип ҡоторта. Әммә иманы көслө булғандар шайтандың ҡотҡоһына эйәрмәйҙәр, сабырлыҡ һәм хикмәт менән кешеләрҙе Аллаһҡа буйһонорға саҡырыуҙарын дауам итәләр.

Кемдәрҙер: «Балам мәктәпте йә вузды тамамлағас намаҙ уҡырға ҡушырмын әле», - ти. Йә иһә: «Ата-әсәйем пенсияға сыҡҡас уҡый башларҙар», - тиҙәр. Беренсенән, намаҙ ҡылыу баланың уҡыуына ла, ата-әсәнең эшенә лә һис зыян килтермәй, киреһенсә, намаҙ уҡыған кешегә Аллаһ Тәғәлә Үҙе ярҙам итеп торасаҡ. Икенсенән, тирә-яҡта төрлө кешеләр кинәт кенә үлеп тора, ә һинең туғандарың әллә ҡапылдан үлмәй торған кешеләрме? Ә бит яҡын кешең намаҙһыҙ хәлдә үлһә, уға намаҙ тураһында бер ни ҙә аңлатмағаның өсөн һин үҙең дә бик ҡаты яуап бирәсәкһең!..

## УҠЫУҘА, ЭШТӘ, ЮЛДА

Намаҙ уҡыуы ауыр түгел, әммә ҡайһы бер кешеләр, уҡыу йәки эшләү сәбәпле намаҙ уҡый алмайбыҙ, тиҙәр. Намаҙ уҡыу өсөн шул тиклем дә нимә кәрәк һуң? Барлап ҡарайыҡ:

### 1. Ваҡыт

«Фатиха» сүрәһен һәм бүтән берәй ҡыҫҡа сүрәне һәм зикер һүҙҙәрен иҫәпкә алғанда, бер рәкәғәтте үтәр өсөн иң күбендә ни бары 2 минут самаһы ваҡыт етә (иң кәмендә – 1 минут), тигән инек. Ә эш йә уҡыу ваҡытына нисә намаҙ тура килә? Йәй

көнө – бер намаҙ – 4 рәкәғәтлек өйлә намаҙы ғына тура килә (йәғни уртаса 6 минут ваҡыт), яҙлы-көҙлө – ике намаҙ, өйлә менән икенде (6 + 6 = 12 минут), ә ҡыш көнөндә – өс намаҙ, өйлә, икенде һәм аҡшам (дөйөм алғанда, уртаса 17 минут).

Намаҙ уҡыу – ул кешенең йән талабы. Кеше бит тән талаптарын үтәп тора: һауа һулай, ашай-эсә, бәҙрәфкә йөрөй һәм башҡаһы. Эш, уҡыу ваҡытында ла бер кем дә быларҙы башҡарыуҙан тыймай: нисә тапҡыр бәҙрәфкә барҙың, унда күпме ваҡыт торҙоң, тип һорамайҙар. Тәмәке тартыусылар ҙа эш ваҡытында төтөн һурып ултырырға нисектер ваҡытын таба. Шуға күрә эш йә уҡыу сәғәттәрендә һеҙ ҙә дөйөм алғанда 6, 12, йә иң күбе 17 минутығыҙҙы намаҙ уҡыуға бүлһәгеҙ, һис бер кем ҡаршы килмәҫтер ҙә инде! Бары тик үҙегеҙҙең намаҙ уҡырға теләгегеҙ генә булһын...

Күп осраҡта эш биреүселәр үҙ хеҙмәткәрҙәренең намаҙ уҡыуына ҡаршы килмәй. Тырышһағыҙ, иншә Аллаһ, намаҙығыҙҙы үҙ ваҡытында үтәрһегеҙ. Эшкә урынлашҡанда уҡ эш биреүсене алдан: «Миңә намаҙ уҡырға көнөнә 6 минут ваҡыт кәрәк булыр», - тип иҫкәртергә лә була. Бик ныҡышһалар ни, намаҙ уҡыу өсөн киткән ваҡытты эштән һуң ҡалып йә эшкә бер аҙ алдараҡ килеп тә ҡапларға була бит. Эш сәғәтендә төшкө аш ваҡыты һәм ял итеү өсөн махсус ваҡыт билгеләнгән булһа, унда инде һорап тормайһың – ул һинең буш ваҡытың. Ғибәҙәт ҡылырға һәр кемдең дә хаҡы һәм хоҡуғы бар. Эш биреүсе намаҙ уҡыуымдан риза булмаҫ, тип уйларға ашыҡмағыҙ. Һөйләшеп ҡарағыҙ, беҙ бит кешеләр – һөйләшәбеҙ, аңлашабыҙ. Аллаһҡа тәүәккәлләгеҙ, Раббығыҙ һеҙгә был мәсьәләне еңеллек менән хәл итергә ярҙамын бирер, иншә Аллаһ.

## 2. Тәһәрәт

Намаҙ уҡыу өсөн ғөсөллө һәм тәһәрәтле булыу кәрәк. Ғөсөл – ул, ябайлаштырып әйткәндә, баштан аяҡ һыу менән ҡойоноу. Көндәлек тормошта уны енси яҡынлыҡ ҡылғандан һуң яңыртып тороу кәрәк (ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ғөсөлдөң тағы үҙ нескәлектәре бар: улар күрем көндәренән һуң һәм бала тапҡандан һуң таҙарынғас, шулай уҡ ғөсөл алалар). Аңлашыла, эшкә йәки уҡыуға ғөсөллө килеш барыу яҡшыраҡ, сөнки ундай урындарҙа баштан аяҡ һыу менән ҡойонорға уңайлыҡтар, ғәҙәттә, булмай. Ә тәһәрәт иһә – ҡулды, битте һәм аяҡтарҙы йыуып алыу. Быының өсөн ғәҙәттәге таҙа һыу ағып торған

кран да етә. Бик булмаһа, үҙегеҙ менән 1 литрлыҡ пластик шешәлә тәһәрәт өсөн махсус һыу алып та йөрөй алаһығыҙ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа (һыу булмаһа, йә һыу бик һалҡын булһа, йә сирле ваҡытта һыу ҡулланырға ярамаһа) тәһәрәтте, ғөсөлдө тәйәммүм (ер затына – тупраҡҡа, ҡомға, туҙанға ике ҡулды ус яғы менән һуғып алып, шуның менән битте һәм ҡулдарҙы һыпырыу) алыштыра.

## 3. Кейем

Намаҙ уҡығанда тәндең ғәүрәт урындарын ҡаплау фарыз. Ир-егеттәр кендектән (биле тапҡырынан) тубыҡтарына ҡәҙәр ғәүрәттәрен мотлаҡ ҡапларлыҡ кейем кейергә тейеш (ғәҙәттә ир-егеттәр быларҙан да артығын кейә). Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейеме иһә йөҙ менән ҡул суҡтарынан башҡа бөтә тәнде ҡапларға тейеш. Әле яңы ғына намаҙға баҫҡан, шәриғәт ҡушҡанса кейенергә күңеле менән әҙер булмаған ҡатын-ҡыҙҙар эшкә, уҡыуға барғанда намаҙ уҡыу кейемен үҙҙәре менән айырым пакетта алып бара алалар. Намаҙ уҡыу өсөн киң итеп тегелгән оҙон, иркен күлдәк һәм яулыҡ кәрәк буласаҡ.

## 4. Таҙалыҡ

Намаҙ уҡыр өсөн, шулай уҡ, кейемдең һәм намаҙ урынының таҙа булыуы мөһим (тиҙәк, бәүел, ҡан, үләкһә кеүек һәм башҡа нәжестәрҙән). Шуға, ғәҙәттә, намаҙ уҡыр өсөн махсус балаҫтар (намаҙлыҡтар) ҡулланалар. Намаҙлыҡ ролен ниндәй ҙә булһа таҙа туҡыма үтәй ала (75х110 см), йә иһә картон, фанера, пакет һәм шуларға оҡшаш бүтән әйберҙәр. Әгәр ҙә иҙән йыуылып торһа һәм таҙа булһа (мәҫәлән, унда бәҙрәфкә барған аяҡ кейемдәрендә үтеп йөрөмәһәләр), әйбер йәймәйенсә лә намаҙ уҡырға мөмкин. Шулай уҡ, әгәр кәрәк икән, намаҙҙы аяҡ кейемен һалмайса ла уҡыйҙар (был Сөннәттә бар). Таҙа булһа, ерҙә, ҡар өҫтөндә лә намаҙ уҡырға мөмкин. Намаҙҙы туҙанлы, цементлы, мазутлы кейемдә лә уҡырға була, сөнки туҙан, цемент, мазут һәм башҡа шундай нәмәләр нәжес тип иҫәпләнмәй.

## Сәфәрҙә саҡта

Сәфәрҙә булған кешегә – мосафирға – намаҙҙарын билдәле бер шарттарҙа ҡыҫҡартып һәм ҡушып уҡыу – ул сөннәти ғә-

мәл. Бының өсөн уның юлы ярайһы уҡ оҙон булырға һәм, ғөмүмән, сәфәр тип иҫәпләнергә тейеш. Мосафир булыу өсөн үҙең йәшәгән ҡала (ауыл) сиктәренән сығыу шарты мотлаҡ. Сәфәрҙә булған кеше өйлә менән икенде намаҙҙарын һәм аҡшам менән йәстү намаҙҙарын ҡыҫҡартып һәм бергә ҡушып уҡый. Иртәнге намаҙ иһә шул көйөнсә ҡала.

Ентекләберәк аңлатҡанда, мәҫәлән, өйлә менән икенде намаҙҙарын бергә ҡушып уҡыу тәртибе ошолай:

• был ҡушылған намаҙҙың ваҡыты өйлә намаҙы ингән мәлдә башлана һәм икенде намаҙы сыҡҡан мәлдә тамамлана (йәғни, мәҫәлән, өйлә намаҙының ваҡыты ингәс тә, өйлә менән икендене бергә ҡушып уҡып ҡуйырға мөмкин),

• икеһе лә 2 (ике) рәкәғәтлек итеп ҡыҫҡартыла (иртәнге намаҙ кеүек),

• иң тәүҙә өйлә намаҙы уҡыла, шунан, сәләм бирep торғас, – икенде намаҙы.

Аҡшам менән йәстү намаҙҙарын бергә ҡушып уҡыу ҙа шуға оҡшаш, әммә аҡшам намаҙы ҡыҫҡартылмай, шулай өс рәкәғәтлек хәлендә ҡала.

Дөйөм алғанда, хәл-торошондоң нисек һәм юлыңдың ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, сәфәр мәлендә намаҙҙарҙы ҡыҫҡартып һәм ҡушып уҡыу – яҡшыраҡ (был сөннәт).

Кем икенсе бер ҡалаға йә ауылға унда дүрт (4) тәүлектән күберәк ваҡытҡа ҡалыу ниәте менән килә, ул намаҙҙарын тулыһынса һәм үҙ ваҡытында башҡара (сөнки ундай кеше мосафир булыуҙан туҡтай). Мәҫәлән, берәү сит илгә айҙар-йылдар дауамында уҡыу ниәте менән китә икән, ул шунда «йәшәргә төпләнгән» булып һанала. Тимәк, уға намаҙҙарын да тулы күләмдә үтәү тейешле.

Әгәр ҙә инде юлсы сит ҡала аша үтеп, уның унда дүрт көндән артыҡ ҡалырға ниәте юҡ икән, был осраҡта ул, мосафир булараҡ, намаҙҙарын ҡыҫҡарта һәм ҡуша.

# ТӘҺӘРӘТ, ҒӨСӨЛ

## Нимә ул тәһәрәт?

Тәһәрәт – ул тәндең бидәле бер өлөштәрен йыуыу, йәғни таҙарыныу. Тәһәрәтһеҙ көйө намаҙ уҡырға ярамай. Тәһәрәт алыуҙың фарыз (мотлаҡ тейешле) ғәмәл икәнлегенә ошо аят дәлил: **«Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Намаҙ уҡырға торһағыҙ, битегеҙҙе һәм ҡулдарығыҙҙы терһәккә тиклем йыуығыҙ, башығыҙҙы (һыулап) һыпырығыҙ һәм ашыҡ һөйәгенә ҡәҙәр аяҡтарығыҙҙы йыуығыҙ. Әгәр бысраҡ *(ғөсөлһөҙ)* булһағыҙ, ул саҡта сафланығыҙ. Әгәр ауырыу булһағыҙ йәки юлда булһағыҙ, һәм кем бәҙрәфтән килһә, йәки ҡатындар менән яҡынлыҡ ҡылһа, һыу тапмаған хәлдә таҙа ҡом алығыҙ һәм уның менән биттәрегеҙҙе һәм ҡулдарығыҙҙы һөртөгөҙ. Аллаһ һеҙгә ауырлыҡ теләмәй, әммә Үҙенең ниғмәттәрен тамамлау өсөн һеҙҙе сафландырырға теләй. Моғайын һеҙ шөкөр итерһегеҙ!»**[1]

Тәһәрәт тураһында Сөннәттән дә дәлилдәр бик күп. Мәҫәлән, «Аллаһ Тәғәлә тәһәрәтһеҙ уҡылған намаҙҙы ҡабул итмәй», - тигән Пәйғәмбәр ﷺ [2]. Һәм башҡа хәҙистәр.

## Тәһәрәт ала торған һыу

Тәһәрәт ала торған һыу таҙа булырға тейеш. Әгәр һыу 210 литр тирәһе күләмдән аҙыраҡ булһа, ул саҡ ҡына нәжес тейгәндән дә бысрана (кесе ярау, оло ярау, ҡан, эт шайығы һәм башҡа шуның кеүек нәжес нәмәләрҙән). Әгәр һыу был күләмдән артыҡ булһа, ул нәжес тейгәндән бысранмай. Әммә уның нәжес арҡаһында тәме, еҫе йә төҫө үҙгәргән булһа, ул да бысранған һанала.

Тәһәрәткә яраҡлы һыу: шишмә, йылға, күл, ҡоҙоҡ, ҡар һыуҙары, крандан аҡҡан һыу, диңгеҙ һыуы (тоҙло булһа ла). Ә тәбиғәте үҙгәргән һыуҙар менән тәһәрәт алмайҙар (мәҫәлән, һут, кола, кеүәҫ кеүек шыйыҡсалар менән).

---

[1] Ҡөрьән, «Аш табыны» сүрәһе, 5:6.
[2] Мөслим, Тирмиҙи, Нәсәи, Әбү Дәүд хәҙис йыйынтыҡтарынан.

## Бәҙрәфкә барыу

Бәҙрәфкә инер алдынан салбарҙың балаҡ остарын күтәрер кәрәк. Шулай уҡ, ихтыяжды ултырған килеш үтәргә кәңәш ителә. Былар кесе ярау иткәндәге ситкә сәсрәгән тамсыларҙан һаҡланыу һәм шул сәбәпле кейемде нәжестән таҙа тотоу өсөн мөһим. Бәҙрәфкә һул аяҡ менән инәләр, уң аяҡ менән сығалар. Бәҙрәфтә булғанда ашарға, эсергә һәм һөйләшергә кәңәш ителмәй.

Кесе хәжәтте үтәгәндән һуң бәүел (һейҙек) тейгән урынды яҡшылап йыуырға кәрәк (атап әйткәндә – енес ағзаһын). Шулай ҙа, кесе ярау иткәндән һуң саҡ ҡына йыуынмай көтөп тороу яҡшыраҡ, сөнки бер аҙҙан һуң тағы бер нисә тамсы бәүел бүленеп сығыуы бар. Бик тә бик һыу булмаһа йә һыу ҡулланмаҫка берәй сәбәп булһа (мәҫәлән, һыу артыҡ һалҡын), бәүелдән таҙарыныу өсөн бәҙрәф ҡағыҙы, салфетка, ҡулъяулыҡ һәм башҡа шундай нәмәләр ҡулланырға ла мөмкин.

Оло хәжәттән һуң да тәндең нәжес тейгән урынын һыу менән йыуырға кәрәк. Бының өсөн иң тәүҙә бәҙрәф ҡағыҙы кеүек берәй нәмә ҡулланалар. Әгәр һыу булмаһа, ҡағыҙ менән таҙа итеп һөртөү ҙә етә.

Кесе ярауҙан һуң да, оло ярауҙан һуң да бысранған урындарҙы һул ҡул менән йыуалар. Һәм хәжәт үтәгән ваҡытта ал менән дә, арт менән дә ҡибла тарафына ҡарап ултырмайҙар.

## Оло тәһәрәт – ғөсөл

Исламда ҡайһы бер ғәмәлдәрҙе ғөсөлһөҙ килеш эшләргә ярамай. Шул иҫәптән – намаҙ уҡырға ла. Ғөсөлө булмағандың тәһәрәте лә тәһәрәткә һаналмай. Ғөсөл – ул бөтә тәнде йыуыу, ҡоро урын ҡалмаҫлыҡ итеп баштан аяҡ ҡойоноу.

Ғөсөл алырға кәрәк булған осраҡтар:

*а)* Енес ағзаһынан мәни (сперма) сығыуы;

*б)* Ир менән ҡатындың енси яҡынлыҡ ҡылыуы;

*в)* Ҡатын-ҡыҙҙарға – күрем көндәренән һуң йә бала тапҡандан һуң ҡан килеү туҡтағас;

*г)* Мосолман булмаған кешегә – Ислам ҡабул иткән саҡта.

Ғөсөл алған кеше бер ыңғайы тәһәрәтле лә һанала, йәғни, яңы ғына ғөсөлләнгән кешегә намаҙ уҡыр өсөн өҫтәмә тәһәрәт алыу кәрәкмәй (әгәр шул арала тәһәрәтте боҙорлоҡ бер нәмә лә эшләмәгән булһа, әлбиттә).

## Ғөсөл алыу тәртибе

*1)* Ғөсөл ҡойонорға тип эстән ниәтләнергә һәм үҙең ишетерлек итеп «бисмиЛләһи-ррахмәни-ррахим» тип әйтергә,

*2)* Ауыҙҙы сайҡарға, танауға һыу тартып таҙартырға, шунан һуң бөтә тәндә ҡоро урын ҡалмаҫлыҡ итеп тулыһынса йыуырға. Башты йыуған саҡта һыу сәстең төбөнә барып етергә тейеш. Йыуынған саҡта, өҫтән – аҫҡа, уң яҡтан һул яҡҡа ҡарай йыуыналар. Йылғала йә күлдә ғөсөл ниәте менән һыу инеп сығыу ҙа дөрөҫ.

## Кесе тәһәрәт – вуду

Тәһәрәт (вуду) – ул битте, ҡулдарҙы терһәккә тиклем, аяҡтарҙы ашыҡ *(сираҡ)* һөйәгенә тиклем йыуыуҙан һәм баштың дүрттән бер өлөшөн һыулап һыпырыуҙан ғибәрәт. Был турала үрҙәге аятта *(28-се биттә)* ап-асыҡ итеп әйтелгән. Тәһәрәтһеҙ килеш намаҙ уҡырға, Ҡәғбә тирәләй тауәф әйләнергә ярамай. Ҡөрьән уҡыу өсөн дә тәһәрәтле булыу яҡшы.

## Тәһәрәттең фарыздары

*а)* Бер тапҡыр битте йыуыу,

*б)* Ҡулдарҙы терһәктәргә ҡәҙәр бер тапҡыр йыуыу,

*в)* Баштың 1/4 өлөшөн һыулап һөртөү,

*г)* Аяҡтарҙы ашыҡ һөйәктәренә тиклем бер тапҡыр йыуыу.

Ошо ғәмәлдәрҙең берәүһе генә төшөп ҡалған хәлдә лә, йә иһә уларҙың эҙмә-эҙлеклелеге боҙолһа, тәһәрәт алынмаған булып һанала.

## Тәһәрәттең сөннәттәре

*а)* Тәһәрәт алырға эстән ниәтләнеү,

*б)* «БисмиЛләһ» тип әйтеү,

*в)* Иң тәүҙә ҡул суҡтарын йыуыу,

*г)* Тештәрҙе мисүәк, йә теш щёткаһы, йә бармаҡ менән йыуып алыу,

*ғ)* Тәһәрәт ғәмәлдәрен бер-бер артлы, өҙлөкһөҙ, оҙаҡҡа һуҙмай башҡарыу (тәндең бер өлөшөн йыуған саҡта икенсе өлөштәре кибеп өлгөрмәһен),

*д)* Устар менән ышҡып йыуыу, һыулап ҡына сығырға түгел,

*ҙ)* Ҡоро ер ҡалмаҫлыҡ итеп йыуыу,

*е)* Ауыҙҙы өс тапҡыр сайҡау (ураҙала булмағанда – ауыҙға тултырғансы һыу алыу),

*ё)* Танауға өс тапҡыр һыу тартыу (уң менән алыу, һул ҡул менән һемгереү; ураҙала булмағанда, һыуҙы күберәк алыу),

*ж)* Тәндең һәр өлөшөн өс тапҡыр йыуыу,

*з)* Иң тәүҙә уң яҡтан башлап йыуыныу,

*и)* Һаҡал араһын һыулы бармаҡтар менән тарау,

*й)* Балдаҡ йә беләҙек булһа, уны шылдырып, аҫтын йыуыу,

*к)* Ҡолаҡтарҙы һыулап һөртөү,

*ҡ)* Ҡулдарҙы, аяҡтарҙы бармаҡ остарынан йыуа башлау,

*л)* Бармаҡтар араһын йыуыу,

*м)* Һыуҙы исраф итмәү, сама белеү.

Был сөннәттәрҙе үтәүҙән тәһәрәт камиллаша, һәм бындай тәһәрәт өсөн әжер-сауаптар бермә-бер арта. Мосолман кеше сөннәти ғәмәлдәрҙе яратып башҡарырға тейеш.

## Тәһәрәт алыу тәртибе

*1)* Тәһәрәт алырға ниәт ҡылып, «бисмиЛләһ» тип әйтергә,

*2)* Ҡул суҡтарын беләҙектәргә ҡәҙәр йыуырға (төнгө йоҡонан тороусыға – өс тапҡыр, бәҙрәфтән оло хәжәтен үтәп килеүсегә – һабынлап, таҙарғансы),

*3)* Уң ҡул менән һыу алып, ауыҙҙы сайҡарға (һыу уртлап, шул көйө кире төкөрөргә түгел, ә сайҡарға) һәм танауҙы таҙартырға, ошонда уҡ тештәрҙе лә йыуырға мөмкин,

*4)* Битте йыуырға (һаҡалды ла тарарға),

*5)* Бармаҡтарҙан алып терһәккә тиклем ҡулдарҙы йыуырға (терһәктәрҙе лә ҡушып), башта – уң, шунан – һул ҡулды,

*6)* Устарҙы һыулап, ике ҡул менән баштың маңлайҙан алып елкәгә ҡәҙәр өҫкө өлөшөн һыпырырға (алдан артҡа ҡарай), шунан шул уҡ һыулы ҡул менән ҡолаҡтарҙы һөртөргә (һуҡ бармаҡ менән – ҡолаҡтың эсен, баш бармаҡ менән – тышын),

*7)* Ашыҡ *(сираҡ, шайтанашыҡ)* һөйәктәренә тиклем аяҡ суҡтарын йыуырға (тәүҙә – уң, шунан – һул аяҡ), ашыҡ һөйәктәре лә ҡушып йыуыла, бармаҡ аралары тураһында ла онотмағыҙ.

Шуның менән тәһәрәт тамам. Уны алып бөткәс: **«Әшһәду әл лә иләһә иллә-Лаһ, үәхдә-һү лә шәрикә ләһ, үә әшһәду әннә Мүхәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһ»,** - тип әйтеү хуплана.

Мәғәнәһе: *«Шаһитлыҡ итәм, Аллаһтан башҡа (табыныуға лайыҡлы) илаһ юҡ, Ул – берәү, Уның иптәштәре юҡ, һәм шаһитлыҡ итәм, Мөхәммәт – Уның ҡоло һәм рәсүле!»*

Тәндең һыу тейергә тейеш өлөштәрендә лак, буяу, ҡамыр кеүек һыу үткәрмәҫлек матдәләр булһа, тәһәрәт тә, ғөсөл дә ҡабул булмай, уларҙы алдан уҡ таҙартып ҡуйыр кәрәк. Әгәр тәндә йәрәхәтте бәйләгән бәйләм бар, һәм һеҙ уға һыу тейгеҙергә теләмәйһегеҙ икән, бәйләмдең өҫтөнән һыулы ҡул менән генә һыпырып алығыҙ.

Тәһәрәт (вуду) алыу өсөн кеше ғөсөллө булырға тейеш.

## Тәһәрәтте нимә боҙа?

*а)* Артҡы юлдан газ сығыуы, кесе һәм оло хәжәттәрҙе үтәү, енес ағзаһынан мәҙи (*русса* – смазка) бүленеп сығыуы;

*б)* Ятып йә нимәгәлер һөйәлеп йоҡлау (бер ҡайҙа ла һөйәлмәгән килеш ойоп китеү тәһәрәтте боҙмай);

*в)* Аңды юғалтыу, иҫереү, аҡылдан яҙыу;

*г)* Устар менән енес ағзаһына маҡсатлы рәүештә ҡағылыу (осраҡлы тейеп алыу йә кейем аша тотоу тәһәрәтте боҙмай);

*ғ)* Ғөсөл боҙолһа, тәһәрәт тә боҙола.

Шулай уҡ, тәндең ҡайһы урынынан булһа ла ҡан, эрен йә яранан шыйыҡлыҡ ағып сыҡҡанда, ауыҙ тултырып ҡоҫҡанда, йә ауыҙ-танауҙан күп итеп ҡан бүленеп сыҡҡанда ла тәһәрәтте яңыртырға мөмкин. Әммә, әгәр мөмкинселек булмаһа, шул көйөнсә намаҙ уҡыу ҙа дөрөҫ. Сөнки был һуңғы һаналып кителгән ғәмәлдәр тәһәрәтте боҙмай, тигән фекер ышаныслыраҡ (сәхих хәҙистәргә таянған дәлилдәр буйынса).

## Тәһәрәтте нимә боҙмай?

*а)* Ир-егеттең – ҡатын-ҡыҙға, ҡатын-ҡыҙҙың ир-егеткә ҡағылыуы, ҡосаҡлауы, үбеүе, иркәләүе (әгәр был мәлдә мәҙи бүленеп сыҡмаһа, әлбиттә);

*б)* Тәһәрәтең булыу-булмауында шикләнеү (йәғни, әгәр тәһәрәт алыуыңды иҫләйһең, ә тәһәрәтең аҙаҡ боҙолғанмы-юҡмы икәнен иҫләмәйһең икән);

*в)* Намаҙ уҡығанда тауыш сығарып көлөү (намаҙ боҙола, әммә тәһәрәт боҙолмай) (был фекер ышаныслыраҡ);

*г)* Мәйет йыуыу;

*ғ)* Нәжескә ҡағылыу (мәҫәлән, ҡан, мәҙи, эт шайығы кеүек нәмәләргә). Тәһәрәтте боҙмаһа ла, кейемгә йә тәнгә нәжес ҡағылған көйө намаҙ уҡырға ярамай, уларҙан таҙарыныр кәрәк);

*д)* Насар һүҙҙәр, ғәйбәт һөйләү;

*ҙ)* Сир менән бәйле булған бүлендектәр (бәүелде тота алмау, һәр ваҡыт арттан газ сығып ауырыу, даими рәүештә ҡан ағып тороу һәм башҡа шуның кеүек нәмәләр) булған осраҡтарҙа кешегә һәр намаҙы алдынан тәһәрәт алырға кәрәк булыр. Әммә намаҙын уҡып бөтөргәнсе уның тәһәрәте боҙолмаған булып һаналыр, намаҙ ваҡытында бүлендектәр сыҡһа ла.

## Аяҡ кейемен һәм ойоҡбаштарҙы мәсехләү

Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ﷺ сөннәте буйынса, тәһәрәт алғанда аяҡтарҙы йыуыу урынына ойоҡбаштарҙың йәки аяҡ кейеменең өҫкө өлөшөн мәсехләү (һыулы ҡул менән һыпырыу) рөхсәт ителә.

Быныӊ шарттары:

*а)* Мәсехләү дөрөҫ булһын өсөн, ойоҡбаш йәки аяҡ кейеме тәһәрәтле саҡта кейелгән булырға тейеш (тәһәрәтһеҙ саҡта кейелгән ойоҡбаштарға һәм аяҡ кейеменә мәсех эшләнмәй),

*б)* Мәсехләү дөрөҫ булһын өсөн, ойоҡбаш йәки аяҡ кейеме ашыҡ һөйәктәренән ашып киткәндәй итеп аяҡ суҡтарын тулыһынса ҡаплап торорға тейеш,

*в)* Ойоҡбаштарҙың үтә йоҡа булмауы ла шарт (мәсехләгән саҡта һыу аяҡтарға беленмәҫлек булһын),

*г)* Ойоҡбаштар бер нисә ҡат булһа һәм улар барыһы ла тәһәрәтле аяҡҡа кейелһә, мәсех иң тышҡы ҡатына ғына эшләнелә,

*ғ)* Мәсехләгәндә аяҡ кейеменең йәки ойоҡбаштың өҫкө өлөшөн һыуға сылатылған өс бармаҡ (һуҡ, урта һәм сығанаҡ бармаҡтар) менән бер мәртәбә һыпыралар (бармаҡтар араһында ара ҡалдырып), аяҡ осонан алып – эскә ҡарай,

*д)* Мәсехләүҙең ваҡыты: юлсы (мосафир) булмаған кешегә – бер тәүлек, ә юлсыға (мосафирға) – өс тәүлек (йәғни, ошо ваҡыт эсендә ойоҡбаштарҙы бөтөнләй сисмәй, тәһәрәт алған һайын улар өҫтөнән мәсех эшләп кенә йөрөргә мөмкин).

Мәсехләнеү дөрөҫ булмаған осраҡтар:

– ваҡыт сығыуы;

– ғөсөл боҙолоуы.

Ойоҡбаштарҙы йә аяҡ кейемен мәсехләү – ул шәриғәт тарафынан рөхсәт ителгән еңеллек (мәҫәлән, һыуыҡ булғанда, ашыҡҡанда, аяҡ кейемен сисеүе мәшәҡәтле булғанда һәм башҡа шундай осраҡтарҙа).

## Тәйәммүм

Тәйәммүм – таҙа ер (тупраҡ, ҡом, туҙан һәм башҡа) менән битте һәм ҡулдарҙы һыпырыу. Һыу булмағанда, йәки һыу булып та, уны ҡулланыу мөмкин булмағанда (мәҫәлән, бик һалҡын булып, ауырып китеү ихтималы булғанда, эсер өсөн һыу аҙ ҡалғанда, һыу янына барыу ҡурҡыныс булғанда), йәки тәндә йәрәхәт булып, һыу тейҙерергә ярамағанда тәйәммүм һуғыу рөхсәт ителә.

Тәйәммүм алыу тәһәрәтте лә, ғөсөлдө лә алмаштыра.

## Тәйәммүм ҡылыу тәртибе

*1)* Тәйәммүм алырға эстән ниәт итергә,

*2)* Ике усты йәйеп ер затына һуғырға һәм шул устар менән иң тәүҙә битте һыпырырға (әгәр ер заты ҡалын ҡатлам булып йоҡһа, устарҙы биткә һөртөр алдынан бер аҙ ҡағып алалар),

*3)* Шунан тағы берҙе ер затына һуғырға һәм шул устар менән терһәктәргә тиклем ике ҡулды һыпырырға.

## Тәйәммүмде боҙа торған нәмәләр

*а)* Һыу ҡулланырға мөмкинселек килеп сығыуы;

*б)* Тәйәммүм ҡылыуҙың сәбәптәре бөтөүе (йәрәхәттең төҙәлеүе, көндөң йылытыуы һәм башҡа),

*в)* Тәһәрәтте һәм ғөсөлдө боҙған нәмәләр тәйәммүмде лә боҙалар.

## Тәйәммүм алырға ла мөмкинлек булмаһа

Әгәр кешенең һыу менән тәһәрәт алырға ла, хатта тәйәммүм һуғырға ла мөмкинлеге юҡ икән, ул кеше шул хәлдә лә намаҙын ҡалдырмаҫҡа тейеш. Тырышып та, һис бер сара таба алмаһа, шул көйөнсә (тәһәрәтһеҙ) уҡылған намаҙҙы ла Аллаһ ҡабул итер, иншә Аллаһ, – сөнки Аллаһ Тәғәлә кеше өҫтөнә көс етмәҫлек эш йөкләмәй. Мәҫәлән: бик ауыр хәлдә ятыусы сирле кешенең тәһәрәт алдырырға йә тәйәммүм ҡылдырырға ярҙамсыһы булмаһа, туҙаны һис булмаған автобус йә самолёт эсендә һәм башҡа шундай осраҡтарҙа.

Шулай уҡ, әгәр кейемгә нәжес тейһә, ә уны йыуырға йә иһә алыштырырға һис мөмкинселек булмаһа, намаҙҙы шул бысраҡ кейемдә лә уҡыйҙар.

# ДОҒАЛАР ҺӘМ СҮРӘЛӘР

Намаҙ бары тик ғәрәп телендә уҡыла. Быны Аллаһ шулай ҡушҡан. Эйе, «Ғәрәп һүҙҙәрен ятлауы ауыр», - тип әйтеүселәр ҙә булыр. Әгәр ҙә бирәүгә: «Ошо һүҙҙәрҙе ятла, йөҙ мең һум аҡса бирәбеҙ», - тиһәләр, нисә минутта ул һүҙҙәрҙе ятлар ине икән?.. Аҡса түләп мәңгелек Йәннәтле була алмайһың, ә намаҙ ул – Йәннәткә алып бара торған бер оло ғәмәл! Ер йөҙөндә ғәрәп булмаған бер нисә йөҙ миллион мосолман, Аллаһҡа буйһоноп, намаҙҙарын Ул ҡушҡанса ғәрәп телендә уҡыйҙар (донъялағы бөтә мосолмандарҙың яҡынса 15 проценты ғына ғәрәп, ҡалғандары – бүтән телдәрҙә һөйләшеүсе милләттәр).

Доғаларҙың һәм сүрәләрҙең транскрипцияларын башҡорт телендә бирәбеҙ. Эйе, башҡорт теле бөтә төрки телдәр араһында әйтелеше һәм яңғырашы яғынан ғәрәп теленә, бәлки, иң яҡынылыр. Был ике тел араһында өндәр айырмаһы бик-бик бәләкәй генә. Әммә шулай ҙа, әгәр мөмкинселегегеҙ булһа, ғәрәп хәрефтәрен өйрәнергә һәм доға-сүрәләрҙе артабан ғәрәпсәнән ятлай башларға тырышығыҙ, был һеҙҙең динегеҙгә камиллыҡ һәм гүзәллек кенә өҫтәр. Әлегә иһә ошо башҡорт хәрефтәре менән яҙылғандарҙы ятлап алығыҙ, эргәгеҙҙә белгән кешеләр булһа – ятлап алғанығыҙҙың дөрөҫ әйтелешен тикшертегеҙ. Ундай кешеләр булмаһа ла, ҡурҡыныс түгел – был доға-сүрәләр барыһы ла еңел генә, тупаҫ хаталар ебәргәндәй ҡатмарлы урындары юҡ. Шулай уҡ, нимә ятлағанығыҙҙың мәғәнәләрен дә аңлап барырға һәм намаҙ ваҡытында ул мәғәнәләрҙе иҫтә тоторға тырышығыҙ.

## Тәкбир

**«Алла́һу әкбәр»** – *«Аллаһ бөйөк!»*

Намаҙ уҡый башлағанда һәм намаҙ эсендә кәүҙәнең торошон үҙгәрткән мәлдәрҙә әйтелә (рөкөғтән турайып баҫҡан саҡта ғына әйтелмәй, ул мәл өсөн бүтән доға бар). Фарыз намаҙҙар ваҡытында тәкбир ғәҙәттә тауыш менән әйтелә (ир-егеттәргә). Ә бына намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыған ваҡыттарҙа имам ғына тәкбирҙе тауыш менән әйтә, ә ҡалғандар уның артынса эстән әйтәләр.

## Истифтәх доғаһы

**«Сүбхә́нәкә Аллә́һүммә үә бихәмдик, үә тәбә́ракә-смүк, үә тәғә́лә джә́ддүк, үә лә илә́һә ғайрүк»** –

*«Дан Һиңә, йә Аллаһ, һәм Һиңә маҡтау! Һинең исемең мөбәрәк, Һинең дәрәжәң олуғ, һәм Һинән башҡа илаһ юҡ!»*

Был доға намаҙ башында ғына (йәғни, беренсе рәкәғәттә генә) уҡыла, бүтән рәкәғәттәрҙә уҡылмай. Тауыш менән түгел, ә эстән әйтергә кәрәк. Эстән уҡыу – ул ауыҙ-телдә ҡыбырлатып, һәр хәрефте урын еренә еткереп әйтеп, әммә эргәңдә торған кеше һине ишетмәҫлек итеп уҡыу.

## Аллаһҡа һыйыныу (истиғәҙә) доғаһы

**«Әғү́ҙү би-Ллә́һи минә-шшәйтáни-рраджи́м»** – *«Ләғнәтле (таштар менән ҡыуылған) шайтандан Аллаһҡа һыйынам!»*

Был доға ла бары тик намаҙ башында – истифтәх доғаһынан һуң уҡыла. Эстән генә уҡыйҙар. Әгәр намаҙ ваҡытында шайтан вәсвәсәләүен һиҙһәгеҙ һәм унан һис арына алмаһағыҙ, шайтанды ҡыуып ебәреү ниәте менән һул яурын яғына өс тапҡыр еңелсә генә төкөрөп алыр кәрәк.

## Бисмилләһ

**«Бисми-Ллә́һи-ррахмә́ни-ррахи́м»** –
*«Мәрхәмәтле һәм Рәхимле Аллаһ исеме менән!»*
Һәр сүрә йә сүрәнән өҙөк уҡыр алдынан эстән әйтелә.

## «Фатиха» сүрәһе

*1)* **Әлхә́мдү ли-Ллә́һи Рáббиль-ғә́ләмиин**
*2)* **Әр-рахмә́ни-ррахиим**
*3)* **Мә́лики йә́үми-ддиин**
*4)* **Ийй́әкә нәғбүдү үә ийй́әкә нәстәғиин**
*5)* **Иһдинә-ссырáтәл-мүстәкиим**
*6)* **Сырáтәл-ләҙи́нә әнғә́мтә ғәләйһим**
**ғайриль-мәғдý́би ғәләйһим үә лә-ддааллиин**

*1) Ғаләмдәр Раббыһы Аллаһҡа – маҡтау,*
*2) Рәхмәтлегә, Рәхимлегә,*
*3) Түләү көнөнөң Батшаһына!*
*4) Беҙ Һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ*
*һәм Һинән генә ярҙам һорайбыҙ,*

*5) Беҙҙе тура юлдан алып барһаңсы –*
*6) Үҙең ниғмәт күрһәткәндәрҙең юлынан,*
*ә Һинең асыуыңа тарығандар һәм аҙашҡандар юлынан түгел.*

Һәр рәкәғәттә тәүҙә «Фатиха» сүрәһен уҡыйҙар, унһыҙ намаҙ дөрөҫ булмай. Шуға күрә был сүрәне мөмкин тиклем тиҙерәк ятлап алығыҙ. Бөтә сүрәләрҙе лә бер аҙ көйләп, тауышты матурайтып уҡыйҙар. Шулай уҡ, «Фатиха» сүрәһендә һәр аяттың иң аҙаҡҡы ижеге һуҙыңҡырап әйтелә, шуға күрә унда һуҙылырға тейешле өндәрҙең хәрефтәрен икешәр тапҡыр ҡуйып сыҡтыҡ. Аяттар араһында бер аҙ пауза яһау – сөннәт. Шулай уҡ, намаҙ уҡыған ваҡытта һәр аятты эстән кисереп, мәғәнәһенә төшөнөп барырға тырышығыҙ, автоматик рәүештә уҡыуҙан һаҡланығыҙ.

«Фатиха» сүрәһен уҡып бөткәндән һуң «Амин!» тиҙәр.

## Рөкөғ доғаһы

**«Сүбхә́нә Ра́ббийәл-Ғаҙыйм»** –
*«Бөйөк булыусы Раббыға дан!»*
Билдән бөгөлөп торған саҡта өс тапҡыр эстән әйтелә.

## Рөкөғтән һуң турая башлағанда

**«Сәмиғә-Лла́һу ли-мән хәмидәһ»** –
*«Аллаһ Уны маҡтаған кешене ишетә»*
Был доға тәкбир кеүек үк тауыш менән әйтелә.

## Рөкөғтән һуң турайып баҫҡас

**«Раббәнә́ (үә) ләкәл-хәмд»** –
*«Һин – Раббыбыҙ, (һәм) Һиңә маҡтау!»*

## Сәждә доғаһы

**«Сүбхә́нә Ра́ббийәл-Әғлә»** –
*«Иң юғары булыусы Раббыға дан!»*
Маңлайҙы ергә терәгән саҡта өс тапҡыр эстән әйтелә.

## Ике сәждә араһында

**«Рабби-ғфир-ли»** – *«Раббым, ғәфү ит мине!»*
Тубыҡтарҙа ултырған саҡта ике тапҡыр эстән әйтелә.

## «Әт-Тәхийәт» (тәшәhhүд) доғаhы

**«Әт-тәхиййә́тү ли-Лләhи үә-ссаләүә́тү үә-ттаййибә́т, әссәлә-́мү ғәлә-ннәбиййи үә рәхмәту-Лла́hи үә бәрәкә́түh, әссәлә́мү ғәләйнә үә ғәлә ғибә́ди-Ллә́hи-сса́лихиин, әшhәдү әл лә иләhә иллә-Ллаh, үә әшhәдү әннә Мүхә́ммәдән ғәбдүhү үә расу́лүh»**

*«Бөтә сәләмдәр, намаҙҙар һәм изге ғәмәлдәр – Аллаһҡа! Пәйғәмбәргә сәләм һәм Аллаһтың рәхмәте һәм бәрәкәте! Беҙгә лә һәм Аллаһтың бөтә изге ҡолдарына ла сәләм! Шаһитлыҡ итәм, Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, һәм шаһитлыҡ итәм, Мөхәммәт – Уның ҡоло һәм рәсүле!»*

«Әт-Тәхийәт» доғаһы һәр ике рәкәғәт һайын тубыҡтарҙа ултырған килеш эстән уҡыла. Был доғаның бүтән төрлө киң билдәле варианттары ла бар.

## «Салли-бәрик» (салауат) доғаhы

**«Алла́hүммә, са́лли ғәлә Мүхә́ммәдин үә ғәлә ә́ли Мүхә́ммәд, кәмә́ салләйтә ғәлә Ибра́hиимә үә ғәлә ә́ли Ибра́hиим, иннәкә хәмидүм-Мәджид;**

**Алла́hүммә, бә́рик ғәлә Мүхә́ммәдин үә ғәлә ә́ли Мүхә́ммәд, кәмә́ бә́рактә ғәлә Ибра́hиимә үә ғәлә ә́ли Ибра́hиим, иннәкә хәмидүм-Мәджид»**

*«Йә Аллаһ! Мөхәммәткә һәм Мөхәммәттең ғаиләһенә рәхмәт ҡыл, Ибраһимға һәм Ибраһимдың ғаиләһенә рәхмәт ҡылған шикелле. Ысынлап, Һин – Маҡтаулы, Данлы!*

*Йә Аллаһ! Мөхәммәткә һәм Мөхәммәттең ғаиләһенә бәрәкәт бир, Ибраһимға һәм Ибраһимдың ғаиләһенә бәрәкәт биргән шикелле. Ысынлап, Һин – Маҡтаулы, Данлы!»*

Был салауат намаҙ аҙағында, тубыҡтарҙа ултырған саҡта, «Әт-Тәхийәт»тән һуң әйтелә (эстән). Унан һуң тағы берәй доға укып ҡуйырға мөмкин, әммә намаҙға яңы баҫыусыларға ошо ла артығы менән етә.

## Тәслим (сәләм биреү)

**«Әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәту-Ллаh»** –

*«Сәләм һеҙгә һәм Аллаһтың рәхмәте!»*

Намаҙҙы тамамлаған саҡта ике яҡҡа башты бороп шулай тип сәләм бирәләр, тәүҙә – уң, шунан һул яҡҡа. Тәкбирҙе әйткән кеүек үк тауыш менән әйтелә.

# НАМАҘ УҠЫУ ТӘРТИБЕ

## Ике рәкәғәтлек намаҙ

Фарыз намаҙҙар араһында иң ҡыҫҡа намаҙ – ике рәкәғәтлек намаҙ, унан да ҡыҫҡараҡ фарыз намаҙы булмай.

Фарыз намаҙҙарҙан – иртәнге намаҙ, йома намаҙы һәм сәфәрҙә саҡта өйлә, икенде һәм йәстү намаҙҙары ике рәкәғәтлек итеп уҡыла. Ике рәкәғәтлек намаҙҙың тәртибе ошолай *(40-41-се биттәрҙәге һүрәттәргә ҡарап өйрәнәбеҙ)*:

### *I. Намаҙҙың башы:*

*1)* Ҡибла тарафына ҡарап баҫырға һәм ниндәй намаҙ уҡырға йыйынғаныңды эстән **ниәт** итергә *(1-се һүрәт)*.

*2)* Тәкбиратүл-ихрам – «Аллаһу әкбәр» тип **тәкбир** әйтеп, намаҙҙы башларға. Шул уҡ мәлдә ҡулдарҙы йә күкрәк, йә яурын, йә ҡолаҡ йәберсәктәре кимәленә тиклем күтәрәбеҙ *(2-се һүрәт)*.

*3)* **Ҡыям** – тәкбирҙән һуң ҡулдар күкрәккә ҡуйыла, бында ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар араһында айырма юҡ (хәнәфи мәҙһәбендә ирҙәр ҡулдарын кендек аҫтына ла ҡуйырға мөмкин). Уң ҡул һул ҡулдың өҫтөнә һалына йә уны ҡыҫып тота. Кәүҙә тура тора, баш иһә саҡ ҡына аҫҡа эйеләңкерәй, күҙҙәр сәждәгә төшөр урынға төбәлгән *(3-сө һүрәт)*.

*4)* Ошо хәлдә **истифтәх** (ҫәнә) һәм **истиғәҙә** доғаларын эстән уҡырға *(3-сө һүрәт)*.

### *II. Беренсе рәкәғәт:*

*5)* Эстән **бисмилләһ** доғаһы әйтелә һәм артабан **«Фатиха» сүрәһе** уҡыла. Иртәнге фарыз намаҙҙа ир-егеттәр уны тауыш менән уҡый. «Фатиха»нан һуң **«Амин!»** тиҙәр. Шунан һуң тағы ла эстән бисмилләһте әйтеп, өҫтәп берәй сүрә уҡып ҡуйыу – сөннәт *(3-сө һүрәт)*.

*6)* Сүрәләрҙе уҡып бөткәс, бер тын алырлыҡ пауза эшләйҙәр ҙә, рөкөғкә китәләр. Бының өсөн **тәкбир** әйтер кәрәк. Ошо мәлдә ҡулдарҙы намаҙ башындағы кеүек күтәреп алыу – сөннәт *(4-се һүрәт)*.


1
2
3
4
5
6

7



8-а



8-б



9



10-а



10-б



*7)* **Рөкөғ** – ул билдән бөгөлөп, тубыҡтарға ҡулдар менән таянып тороу. Устар тубыҡтарға ныҡ итеп терәлергә, ә арҡа мөмкин тиклем төҙ (ергә параллель) булырға тейеш, башты ла арҡа менән бер кимәлдә тотабыҙ. Терһәктәр ҡабырғаларҙан ике яҡ ситкә бер аҙ алыҫайтыла. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә, әгәр уларҙы сит ирҙәр күреп ҡалыуы мөмкин булһа, рөкөғтә тулыһынса бөгөлмәйҙәр, ә яҡынса 45 градусҡа ғына эйеләләр. Ошо хәлдә эстән өс тапҡыр **рөкөғ доғаһы** уҡыла *(5-се һүрәт)*.

*8)* Доғаны әйтеп бөткәс, рөкөғтән торабыҙ. Ошо мәлдә **«Сәмиғә-Ллаһу ли-мән хәмидәһ»** тиҙәр (ир-егеттәр тауыш менән әйтә). Сөннәт буйынса, рөкөғтән торған саҡта ҡулдарҙы тәкбир әйткәндәге кеүек күтәреп төшөрөргә мөмкин *(4-се һүрәт)*.

*9)* Турайып баҫҡас, эстән **«Раббәнә ләкәл-хәмд»** йә **«Раббәнә үә ләкәл-хәмд»** тип әйтәләр. Шунан бер аҙ тыныс ҡына баҫып торор кәрәк (иң кәмендә – бер тапҡыр тын алғансы). Был мәлдә арҡа ла, ҡулдар ҙа, аяҡтар ҙа тура булһын *(6-сы һүрәт)*.

*10)* **Тәкбир** әйтергә һәм сәждәгә төшөргә. **Сәждә** – ул маңлайҙы, танауҙы, ике ҡул суғын, ике тубыҡты һәм ике аяҡ бармаҡтарын ергә тейгеҙеп эйелеү. Хәнәфиҙәр мәҙһәбе буйынса, сәждәгә төшкәндә иң алда ергә тубыҡтарҙы ҡуялар, шунан – ҡулдарҙы. Әммә, сәхих хәҙистәргә ярашлы, иң тәүҙә ҡулдарҙы, шунан тубыҡтарҙы ҡуйырға ла мөмкин. Устар йә яурындар кимәленә, йә ҡолаҡтар кимәленә ҡуйыла. Ҡул бармаҡтары ла, аяҡ бармаҡтары ла ҡибла тарафына йүнәлтелә. Терһәктәр ҡабырғаларҙан ике яҡ ситкә алыҫайтыла һәм, шулай уҡ, терһәктәр ергә яткырылмай. Үксәләр бер-береһенә тейеп торалар. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә, әгәр уларҙы сит ир-егеттәр күреүе мөмкин булһа, терһәктәрен тәндән айырмай һәм арт һындарын артыҡ өҫкә күтәрмәй. Ошо хәлдә эстән өс тапҡыр **сәждә доғаһын** әйтергә кәрәк *(7-се һүрәт)*.

*11)* Беренсе сәждәнән һуң тәкбир әйтеп башты күтәрәләр һәм арҡаны тура ҡуйып, ҡулдарҙы тубыҡтарға һалып, ике аяҡты тубыҡтан үҙ аҫтыңа бөкләгән килеш бер аҙ ултырып алалар (был **ифтираш** тип атала). Ошо ваҡыт ике тапҡыр **«Рабби-ғфир-ли»** тиергә *(8-се һүрәт)*.

*12)* **Тәкбир** әйтеп, икенсе тапҡыр **сәждәгә** китергә. Ул сәждә беренсе сәждәнән бер нимәһе менән дә айырылмай *(йәғни 10-сы пункт тулыһынса ҡабатлана)*. Ошо хәлдә тағы ла өс тапҡыр эстән **сәждә доғаһын** әйтергә кәрәк *(7-се һүрәт)*.

*13)* Шунан һуң **тәкбир** әйтеп икенсе рәкәғәт өсөн торорға.

### ***III. Икенсе рәкәғәт:***

*5-се пункттан алып 12-се пунктҡа тиклем тулыһынса яңынан ҡабатларға.*

*Иҫкәрмә:* ғәҙәттә, икенсе рәкәғәттә «Фатиха»нан һуң уҡылған сүрә беренсе рәкәғәттекенә ҡарағанда ҡыҫҡараҡ була.

*14)* Икенсе **сәждә** эшләгәндән һуң, **тәкбир** әйтеп башты күтәреп, **ифтираш** хәленә кереп ултырабыҙ. Һул аяҡ суғын эскә ҡарай бөкләп һалырға һәм шуның өҫтөнә ултырырға кәрәк. Уң аяҡ суғы иһә сәждәләге хәлендә ҡала, уның өҫтөнә ултырмайҙар. Шулай һәр намаҙҙа икенсе рәкәғәттән һуң эстән **«Әт-Тәхийәт»** доғаһы уҡыла. Был ваҡыт уң ҡулдың һуҡ бармағы ҡибла тарафына күрһәтеп ҡыбырлап торорға тейеш, һәм намаҙ уҡыусы үҙе шул бармағына ҡарап ултыра. Уң ҡулдың ҡалған бармаҡтары йоҙроҡҡа төйнәлә *(9-сы һүрәт)*.

### ***IV. Намаҙҙың аҙағы:***

*15)* «Әт-Тәхийәт» уҡып бөткәндән һуң, шул хәлдә ултырып ҡалып, Пәйғәмбәргә ﷺ эстән **салауат** әйтәләр (киң билдәле «Салли-бәрик» доғаһының төрлө варианттарын уҡыйҙар) *(8-се һүрәт)*. Шулай уҡ, был мәлдә, «Әт-Тәхийәт»те уҡығандағы кеүек, уң ҡулдың һуҡ бармағын ҡыбырлатып ултырырға ла мөмкин, быға хаҡ Сөннәттән дәлилдәр бар *(9-сы һүрәт)*.

*16)* Салауаттан һуң, Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп эстән ниндәй ҙә булһа берәй **дөйөм доға** уҡырға мөмкин (күп осраҡта «Раббәнә әтинә» доғаһын уҡыйҙар).

*17)* Намаҙҙы тамамлау өсөн ике яҡҡа башты бороп «Әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәту-Ллаһ» тип сәләм бирергә – иң тәүҙә уң яҡҡа, шунан һул яҡҡа. Был **тәслим** тип атала. Ир-егеттәр сәләм һүҙҙәрен тауыш менән әйтә *(10-сы һүрәт)*.

Шуның менән 2 рәкәғәтлек намаҙ тамам.

### ***V. Намаҙҙан һуң:***

Намаҙҙан һуң ултырып ҡалып **«Аятүл-Күрси»** уҡыу, уң ҡул бармаҡтары менән һанап 33-шәр тапҡыр эстән **зикер** әйтеү («Сүбхәнә-Ллаһ», «Әлхәмду ли-Лләһ», «Аллаһу әкбәр» тип) һәм ҡулдарҙы күтәреп **доға** ҡылыу – сөннәт. Намаҙҙан һуң доғалар ҡабул була. Доға ҡылғанда иң тәүҙә Аллаһҡа маҡтау һәм шөкөр һүҙҙәре әйтелә, шунан һуң – Мөхәммәт пәйғәмбәргә ﷺ салауат һүҙҙәре, аҙаҡ ҡына – Аллаһҡа үҙ үтенестәрегеҙ.

## Өс рәкәғәтлек намаҙ

Фарыз намаҙҙар араһында аҡшам намаҙы ғына өс рәкәғәттән тора. Сәфәр мәлендә лә ул ҡыҫҡартылмай. Уның тәртибе:

***I. Намаҙҙың башы:*** шул уҡ.

***II. Тәүге ике рәкәғәт:*** шул уҡ.

*Иҫкәрмә:* аҡшам намаҙында «Фатиха» сүрәһе һәм унан һуң уҡылған берәй сүрә тәүге ике рәкәғәттә тауыш менән уҡыла (ир-егеттәр өсөн).

*Иҫкәрмә:* икенсе рәкәғәт аҙағында «Әт-Тәхийәт» уҡығандан һуң, тәкбир әйтеп, өсөнсө рәкәғәт өсөн тороп баҫыр кәрәк.

***III. Өсөнсө рәкәғәт:*** 2-се рәкәғәт кеүек.

*Иҫкәрмә:* өсөнсө рәкәғәттә сүрәләр эстән уҡыла, һәм, ғәҙәттә, тик «Фатиха» сүрәһен генә уҡыйҙар.

***IV. Намаҙҙың аҙағы:*** шул уҡ.
Шуның менән 3 рәкәғәтлек намаҙ тамам.

***V. Намаҙҙан һуң:*** шул уҡ.

## Дүрт рәкәғәтлек намаҙ

Фарыз намаҙҙарҙан өйлә, икенде һәм йәстү намаҙҙары дүрт рәкәғәтлек итеп уҡыла. Уларҙың тәртибе:

***I. Намаҙҙың башы:*** шул уҡ.

***II. Тәүге ике рәкәғәт:*** шул уҡ.

*Иҫкәрмә:* йәстү намаҙында «Фатиха» сүрәһе һәм унан һуң уҡылған берәй сүрә тәүге ике рәкәғәттә – тауыш менән (ир-егеттәр өсөн), өйлә менән икенделә иһә бөтә рәкәғәттәрҙә лә сүрәләр эстән уҡыла.

*Иҫкәрмә:* икенсе рәкәғәт аҙағында «Әт-Тәхийәт» уҡығандан һуң, тәкбир әйтеп, өсөнсө рәкәғәт өсөн тороп баҫыр кәрәк.

***III. Аҙаҡҡы ике рәкәғәт:*** тәүге ике рәкәғәт кеүек үк.

*Иҫкәрмә:* өсөнсө һәм дүртенсе (аҙаҡҡы) рәкәғәттәрҙә бөтә намаҙҙарҙа ла сүрәләр эстән уҡыла, һәм, ғәҙәттә, тик «Фатиха» сүрәһен генә уҡыйҙар.

***IV. Намаҙҙың аҙағы:*** шул уҡ.
Шуның менән 4 рәкәғәтлек намаҙ тамам.

***V. Намаҙҙан һуң:*** шул уҡ.

# НАМАҘ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

## Намаҙ шарттары

***а)*** Намаҙ ваҡытының кәрәгү.

Һәр намаҙҙы үҙ ваҡыты ингәс уҡыйҙар, ә ваҡытынан алда түгел. Әгәр берәй етди сәбәп менән намаҙ ваҡытын үткәреп ебәрһәгеҙ, уның өсөн ҡаза уҡып ҡуйыр кәрәк (шул уҡ намаҙ, әммә ниәт иткәндә «ҡаза намаҙ» тип ниәт ителә);

***б)*** Тәһәрәтле булыу;

***в)*** Ғәүрәтте ҡаплау.

Ир-егеттәргә – кендектән алып тубыҡтарҙың аҫҡы тәнгәленә тиклемге тән өлөшөн, ә ҡатын-ҡыҙҙарға – йөҙҙән һәм ҡул суҡтарынан башҡа бөтә тәнде ҡаплау тейешле (ҡатын-ҡыҙҙарҙың аяҡтарын ҡаплау-ҡапламау тураһында төрлө фекерҙәр бар, әммә, аяҡтар ҙа ғәүрәткә һанала, тигән фекер ышаныслыраҡ, шуға ҡатын-ҡыҙҙарҙың намаҙ ваҡытында аяҡтары яланғас булмауы яҡшы);

***г)*** Кейемдең, тәндең һәм намаҙ уҡый торған урындың нәжестән таҙа булыуы;

***ғ)*** Ҡиблаға табан боролоп баҫыу;

***д)*** Сүтрә (кәртә).

Алда йә стена, йә бағана, йә эйәр бейеклегендәй берәй әйбер булырға тейеш – намаҙ уҡыусы алдынан бер кем дә үтмәһен өсөн. Ә сүтрә артынан үтергә ярай;

***ҙ)*** Ниндәй намаҙ уҡырға йыйынғаныңды эстән ниәт итеү.

## Намаҙҙың фарыздары (рөкөндәре)

Намаҙ эсендә уның фарыздарын (рөкөндәрен) үтәү – мотлаҡ тейешле ғәмәл, шуларһыҙ намаҙ намаҙға һаналмай. Әгәр ошо рөкөндәрҙең береһе булһа ла төшөп ҡалһа, ул намаҙҙы яңынан уҡыр кәрәк буласаҡ. Ул рөкөндәр һигеҙ:

***1)*** Тәкбиратүл-ихрам. Бөтә намаҙҙар ҙа тәкбирҙән башлана;

***2)*** Ҡыям – тура баҫып тороу.

Намаҙҙа тура баҫып тороу, бер нәмәгә лә һөйәлмәү таянмау – мотлаҡ ғәмәл. Тик аҡланырлыҡ сәбәбе булған кешеләргә ге-

нә намаҙҙы ятып, ултырып, һөйәлеп йә таянып уҡырға рөхсәт ителә. Әгәр кеше оҙаҡ баҫып тора алмай икән, өс аят уҡығансы булһа ла баҫып торһон, аҙаҡ ултырырға йә таянырға мөмкин (мәҫәлән, ултырғысҡа);

***3)*** Ҡөрьән уҡыу.

Намаҙ ваҡытында өс аят булһа ла Ҡөрьән уҡылырға тейеш, әммә ятлай алған йә яттан белгән кешегә «Фатиха» сүрәһен тулыһынса уҡып ҡуйыу – мотлаҡ;

***4)*** Рөкөғ – билдән бөгөлөп, тубыҡтарға таянып тороу.

Кем саҡ ҡына ла бөгөлә алмай, ул үҙенең рөкөғкә киткәнен ымлап-ишаралап булһа ла күрһәтә;

***5)*** Сәждә – маңлайҙы, танауҙы, ике ҡулды, ике тубыҡты һәм ике аяҡ бармаҡтарын ергә тейгеҙеп эйелеү. Сәждәгә төшә алмаған кешеләр шулай уҡ ымлап-ишаралап булһа ла үҙенең сәждәгә китеүен күрһәтергә тейеш. Мәҫәлән, рөкөғтә бөгөлгәнгә ҡарағанда саҡ ҡына нығыраҡ аҫҡараҡ бөгөлөңкөрәп;

***6)*** Ҡәғдә – намаҙ аҙағында ултырыу.

Кем ятлай ала һәм кем яттан белә, был ваҡытта улар «Әт-Тәхийәт» (тәшәһһүд) доғаһын мотлаҡ уҡырға тейештәр;

***7)*** Тәртип – һәр рөкөндә эҙмә-эҙлекле башҡарыу;

***8)*** Хурудж – ике яҡҡа сәләм биреп, намаҙҙан сығыу.

Был һигеҙ фарызды ныҡлап иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Намаҙҙың вәджибтәре

Вәджибтәр – шулай уҡ мотлаҡ ғәмәлдәр, әммә уларҙың дәрәжәһе фарыз ғәмәлдәрҙекенә ҡарағанда саҡ ҡына түбәнерәк. Әгәр белә тороп намаҙҙың берәй вәджибен төшөрөп ҡалдырһаң, намаҙ ҡабул булмай. Ә онотоп төшөрөп ҡалдырһаң, намаҙҙан һуң ике тапҡыр сәһү сәждәһе (хатаны төҙәтеү сәждәһе) эшләнелә, намаҙҙы иһә тулыһынса яңынан уҡып тороу кәрәкмәй. Намаҙҙың вәджибтәре лә һигеҙ:

***1)*** «Фатиха» сүрәһен уҡыу;

***2)*** Кәүҙә торошон үҙгәрткән һайын тәкбир әйтеү (рөкөғтән турайып баҫҡан саҡта ғына тәкбир әйтелмәй);

***3)*** Рөкөғтә һәм сәждәлә бер тәсбих әйтерлек ваҡыт тороу (мәҫәлән, рөкөғтә – «Сүбхәнә Раббийәл-Ғаҙыйм» тип, ә сәждәлә «Сүбхәнә Раббийәл-Әғлә» тип әйткәнсе);

***4)*** Рөкөғтән турайғанда – «Сәмиғә-Ллаһу ли-мән хәмидәһ» тип һәм турайып баҫҡас «Раббәнә (үә) ләкәл-хәмд» тип әйтеү;

***5)*** Ике сәждә араһында турайып ултырыу;

***6)*** Һәр икенсе рәкәғәттән һуң «Әт-Тәхийәт» (тәшәһһүд) доғаһын уҡыр өсөн ултырыу;

***7)*** Иртәнге, аҡшам һәм йәстү намаҙҙарында имамдың тәүге ике рәкәғәттә Ҡөрьәнде асыҡ тауыш менән уҡыуы, башҡа рәкәғәттәрҙә Ҡөрьәнде эстән уҡыу (шулай уҡ, имам кеше тәкбирҙәрҙе, рөкөғтән турайған саҡтағы доғаны һәм намаҙ аҙағындағы сәләм һүҙҙәрен дә тауыш менән әйтә);

***8)*** Намаҙҙың вәджиб өлөшөндә хата китһә, намаҙҙан һуң сәждә-сәһү ҡылыу.

Был һигеҙ вәджибте лә ныҡлап иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Намаҙҙың сөннәттәре һәм мүстәхәбтәре

Намаҙҙың сөннәт-мүстәхәбтәрен үтәмәһәң дә, намаҙ ҡабул була, иншә Аллаһ. Әммә уларҙы үтәгәндән сауап арта, намаҙ камиллаша һәм иманығыҙ көсәйә. Шуға уларға ҡарата битараф һәм иғтибарһыҙ булырға ярамай. Улар:

***1)*** Фарыз намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыу;

***2)*** Фарыз намаҙы өсөн аҙан әйтеү;

***3)*** Фарыз намаҙы өсөн ҡәмәт әйтеү;

***4)*** Намаҙға кергәндә тәкбир менән бергә ҡулдарҙы күтәреү;

***5)*** Ҡыямда ҡулдарҙы бер-береһе менән бергә тотоу;

***6)*** Намаҙ башында эстән истифтәх (ҫәнә) доғаһын уҡыу;

***7)*** «Фатиха» сүрәһенән алда эстән истиғәҙә доғаһын уҡыу;

***8)*** Һәр сүрәне уҡыр алдынан эстән бисмилләһте әйтеү;

***9)*** «Фатиха» сүрәһенән һуң «Амин!» тиеү;

***10)*** Рөкөғкә киткәндә, рөкөғтән турайғанда һәм тәшәһһүдтән һуң өсөнсө рәкәғәткә торғанда ҡулдарҙы беренсе тәкбирҙәге кеүек күтәреп төшөрөү;

***11)*** Рөкөғтә һәм сәждәлә тәсбихтәрҙе өс мәртәбә әйтеү;

***12)*** Һуңғы тәшәһһүдтән һуң Пәйғәмбәргә ﷺ салауат уҡыу.

Был ун ике сөннәт һәм мүстәхәбте иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Намаҙ ваҡытында ашығыуҙан һаҡланығыҙ, ашығыу – шайтандан. Бар иғтибарҙы намаҙға туплағыҙ, көндәлек мәшәҡәттәр тураһында уйланмағыҙ, һәм намаҙҙан рәхәтлек табырһығыҙ, иншә Аллаһ. Барығыҙға ла Раббыбыҙ иман ныҡлығы һәм файҙалы үткәрелгән ғүмер насип итһен!

Был китап менән ипле ҡыланыуығыҙ,
уны төрлө бысраҡ урындарҙа ҡалдырмауығыҙ һорала,
сөнки уның күп кенә урындарында Ҡөрьәндән өҙөктәр,
изге доғалар, хәҙистәр һәм Аллаһтың
исемдәре ҡулланылған!

**Радость для искренних рабов Аллаха –**
**КНИГА МОЛИТВЫ**

*(на башкирском языке)*

Төп автор: Илнур Әбү Ғәҙел
Башҡортсаға тәржемә итеүсе: Булат Кәримов
Компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе: Айгиз Сафин
Дини мөхәррир: Ишморат Хәйбуллин
Әҙәби мөхәррир: Айгиз Сафин
Корректор: Зилиә Байрамғолова
Китаптың йөкмәткеһе өсөн яуаплылар:
Илнур Әбү Ғәҙел, Ишморат Хәйбуллин

Ҡағыҙ форматы 60 x 90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Офсет ысулы
менән баҫылды. ДежаВю гарнитураһы.
Тиражы 10 000 дана.